✓ *Хәҙерге Өфө ҡалаһы ултырған урында, тип һөйләгән элекке Нуғай даруғаһы Ҡаратабан олоҫо старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаев, башҡорттар Рәсәйгә ҡушылғанға тиклем үк олуғ ҡала булған; ул ҡала Ағиҙел йылғаһы буйлап үргә табан, Өфө йылғаһының тамағына тиклем ун саҡрым самаһы ергә һуҙылған. Башҡорттар яңы ҡалғане, ул имәндән төҙөлгән булғанға, Имәнҡала тип тә йөрөткән.*

**Петр РЫЧКОВ.**

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15 - 21 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№42 (460)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Аҫырағас, аҫырағас...**

малыңды айыуға үләкһә итмә



5

**Кешелек йөҙөндө юғалтма,**

ул Хоҙай Тәғәлә бүләге...



8

**Заманға яраҡлашып...**

заманса һөнәрҙәр үҙләштер



11

**Тәнҡитте ҡабул итмәйбеҙ,**

ә маҡтау кимәлендә етмәгәнбеҙ...



12-13

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һуңғы йылдарҙа башҡорттарҙың үҙ илен ташлап, күпләп ситкә, хатта сит илдәргә сығып китеүен хупларҙамы, хурларҙамы?

***Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы, педагог:*** Яҡшымы был, насармы? Башҡорттарҙың һан яғынан да, башҡортса һөйләшеүселәрҙең кәмеүе йөһәтенән дә беҙ ЮНЕСКО хәстәрлеге кимәленә килеп еткәнбеҙ икән, бында һәр йөһәттән уйланырға урын бар. Әйткәндәй, яңыраҡ ҡына Юлдаш телеканалынан "Арыҫлан" ир-егеттәр ҡорон ҡарап ултырғайным. Унда әлеге мәсьәлә бик урынлы күтәрелде. Тапшырыуҙы алып барыусы Уйылдан Ғәлин шундай урынлы фекер әйтте: әгәр бөтәбеҙ ҙә рәхәт, енел, мул тормош эҙләп ситкә сығып китһәк, еребеҙҙе, илебеҙҙе кем һаҡлар? Был һорау бөтәбеҙҙе лә борсорға тейеш. Тик әлеге ҡорҙа ҡатнашыусылар, башҡорт бөтә ерҙә лә йәшәргә тейеш, фәҡәт үҙҙәренең башҡортлоҡтарын ғына онотмаһындар, тигән фекер әйтеп, күңелде ҡырып ҡуйҙы. Ошоно йөпләп, Вәхит Хыҙыров Ҡаҙағстандың "Киләсәк" тигән дәүләт программаһын миҫалға килтерҙе. Йәнәһе, ҡаҙаҡ егеттәре һәм ҡыҙҙары сит ил вуздарын тамамлағандан һуң шунда йәшәргә тороп ҡала ала һәм быны Ҡаҙағстан хөкүмәте хуплай. Минә билдәле булыуынса, Ҡаҙағстан хөкүмәтенең был программаһында бындай юлдар юҡ, улар, киреһенсә, үҙ иләштәрен илгә ҡайтырға саҡыралар. Беҙ ҙә сит ил вуздарына уҡырға киткән йәштәребеҙҙе республикабыҙға ҡайтырға саҡырырға, уларға тейешле шарттар тыуҙырырға тейешбеҙ. Күп талантлы, белемле ҡыҙҙарыбыҙ һәм егеттәребеҙ Башҡортостанда эшләргә һәм йәшәргә шарттар булмау арҡаһында ситтә йәшәргә мәжбүр.

Ошо унай менән сит ил кешеһенә кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙарыбыҙ тураһында ла әйтеп китмәксемен. Кеше был донъяға өс төп бурыс менән тыуа: тәбиғәт алдында (тәбиғәтебеҙҙе һаҡлау, уның байлыҡтарын ишәйтеү); атай-әсәй алдында (уларҙы ҡәҙерләү, ихтирам итеү һәм хәстәрлек күреү); милләт алдында (милләтеңде ишәйтеүгә өлөш индереү, шәжәрәңде лайыҡлы дауам итеү). Сит илгә сығып китеп, кире әйләнеп ҡайтмаған егет һәм ҡыҙҙарыбыҙ ошо бурыстарҙың береһен дә үтәй алмай, тимәк. Ундайҙар ҡол кимәленә төшә, сит ерҙә нисек кенә етеш, рәхәт йәшәмәһен, күнеле китек, буш була, сөнки ул үҙ телен дә, йөҙөн дә юғалта, төп бурысын да үтәй алмай, ә яттарға, ситкә хеҙмәт итә, тимәк, рухи ҡоллоҡта яфа сигә.

***Хисмәт ЮЛДАШЕВ, шағир:*** Афған, Чечня ут өйөрмәләре аша үткән (арабыҙҙа төрмәлә ултырып сыҡҡандар ҙа бар), үҙҙәренең ғаиләләренә, тыуғандарына тоғро, намыҫлы, сая ир-егеттәр менән Себерҙә эшләп йөрөүемә лә хәҙер бер тиҫтә йыл үтеп китте. Бер ай - өйҙә, бер ай - Себерҙәмен. Хәҙер мин ҡайҙағы үҙемдең ысын үҙем икәнлегендә, йәшәгән еремдең ҡайһыһы үҙемдеке икәнлегендә лә бутала башланым. Бәлки, шулай яҡшыраҡтыр ҙа, сөнки тәүге йылдарҙа өйҙән сығып китеп, Себергә барып, бер аҙна тирәһе сирҡаныс алып эшләп киткәнсе, күңел һыҙлап йонсота торғайны. Һинә тап-таман, әйҙә, кинән, шағир, һинә шул кәрәк тә инде! Һыҙланыу кәрәк. Башҡаларға, ана, ниндәй өлөш тейгән: улар ил, тел, тип ғүмер буйы һыҙлана, ә һинә нимә инде өс балаң өсөн генә һыҙланыуы... 1999 йылдың октябрь урталарында улым Рамаҙан тыуғанда, оло улыма - 16, уртансыһына 12 йәш ине. Ә мин, ғаилә башлығы, өс ай инде эшһеҙ йөрөйөм. Абруйлы ағайҙар ҙа ярҙам итә алмағас, ҡайһылайтаһың инде, Себергә сығып китмәй, ни ҡылаһың. Шунан алып яҙмыш ҡушыуы буйынса Себерҙәмен.

Былар ҙы мин ни өсөн һөйләйем, сөнки һәр нәмәнең сәбәбе була. Ә мин Себергә сараһыҙҙан сығып киттем. Кем һуң ул вахтовик? Ул бер ай - ҡол, бер ай - ҡош. Кем әйтмешләй, һүҙҙең дөрөҫөн әйтеп һөйләргә кәрәк: был егеттәр ярамһаҡланыуҙы, алдаҡты, депутаттарҙы һәм бер ниндәй власты өнәмәгән кешеләр. Вахтовиктарҙы бөткән эскеселәр, тип яҙалар, был ялған. Улар нык таҙа кешеләр. Эскеселәр "быть или не быть" тигән заманда ғүмерҙәре өсөн көрәшеүсе ирек һөйөүсе ҡол гладиаторҙар һымаҡ була алмай. Мин унда күберәк Аҙнаҡай, Минзәлә, Актаныш, Дүртөйлө, Илеш, Приютово егеттәре менән тәүҙә ҡот осҡос ауыр бырау лау эштәрендә, хәҙер 6 йыл инде нефть табыу, уны әҙерләү һәм торбалар менән ҡыуыу эшендәмен. Беҙҙә бында урындағы халыҡ - ханттар, совет заманында ошонда тороп ҡалған белорустар, украиндар, күршеләш эшләгән башҡа нефть компанияһы вәкилдәре лә ихтирам менән "башҡорттар" тип кенә торалар. Сөнки мин эшләгән нефть ятҡылыҡтарында СССР тарҡалғандан алып 1990 йылдар аҙаҡтарына тиклем ҡыйралып ятҡан ташландыҡ донъя булған, хәҙер уның гөл һымаҡ сәскә атҡанын күрһәгеҙ ине! Тау-тау металл һыныҡтары өйөлдө, тау-тау шешәләр күмелде. Күҙ алдында һаҙлыҡтар аша йөҙәр саҡрым юлдар, меңәр саҡрым торбалар һалынды. Себерҙә йәшәгән яҡташтар өсөн дә эш урындары булдырылды. Оҙаҡҡа һуҙылған 60 градусҡа тиклемге ҡышҡы һыуыҡтарҙа ла һынатмай, уңыштарға өлгәшелде, тәжрибә тупланды. Йәшәү өсөн бөтә шарттар ҙа булған ҡунҡханаларға торошло дөйөм ятаҡтар комплексы төҙөлдө. Ошоларҙың бөтәһен дә ана шул Башҡортостан атҡарып сыҡты. Мин бәхетлемен, шатмын яҙмышыма. Башҡорт та башҡорт тип һөйләнгән тыуған еремдә булмаһа ла, туңған еремдә уңғаныма.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ТУҠТА, МӘЛ!



✓ *Нишләп үҙебеҙҙә эш булмаһын! Елкәң генә булһын - ике ҡулға бер эш кенә табырға мөмкин! Умартасылыҡ менән шөғөлләнгән ир-азаматтарыбыҙҙы ғына килтерәйем миҫалға - сезонына 1-әр миллион табыш алалар.*



УЯН, УЙЛАН...



# ҮҘ АҠСАҢА...
## үҙ үлемеңде һатып алаһың

**Һыра - йәмғиәтебеҙҙе торған һайын һәләкәткә илтеүсе, уны бөтөнләй юғалтыуға алып барыусы ҡот осҡос ҡорал икәнен беләһегеҙме? Белмәһәгеҙ, уҡығыҙ түбәндәге юлдарҙы.**

### Ирҙәрҙе импотенция ҡурҡытамы?

● Һырала булған ҡатын-ҡыҙҙар енси гормондары ирҙәрҙе "енси ялҡауҙарға" әйләндерә. Һыраның тыуған иле Чехияла электән йәшәп килгән мәҡәл шундай: "Һыра эсеүсе ир ҡарбузға оҡшаған - уның эсе ҡарбуз хәтле, ә ҡойроғо ҡороған", - ти.

● Ваҡыт үтеү менән был ихтыярһыҙ, апатияға бирелеүсән әҙәм бары тик диванда ҡырын ятып телевизор ҡарай алырлыҡ ҡына затҡа әйләнә. Артабан унда ҡуҙғыусанлыҡ һәм ярһыусанлыҡ барлыҡҡа килеүе мөмкин.

● Был заттың кәүҙә төҙөлөшө лә үҙгәрә - янбашы ҙурая, май биҙҙәре, ҡатын-ҡыҙ тибына яраҡлашып, янбашына йыйыла башлай. Эс мускулдары көсһеҙләнә һәм "һыра ҡорһаҡ" барлыҡҡа килә. Күпләп май йыйған күкрәк биҙҙәре ҙурая, ә ҡайһы саҡта унан хатта һөт тә бүленеп сығыуы бар.

### Ҡатын-ҡыҙҙарҙы түлһеҙлек борсоймо?

● Һыра эскән ҡатын-ҡыҙ айырыуса ярһыуға әйләнә. Уларҙың тауышы ҡалыная, "һыра мыйығы" ла барлыҡҡа килеүе мөмкин.

● Шулай уҡ һыра күкрәк биҙе, йыуан эсәк, тура эсәк яман шештәре, енси ағзалар ауырыуы, йөрәкте май бөрөүе, арҡа һөйәге эшмәкәрлегененң боҙолоуы, бауыр циррозы, бауыр шешеүе, ашҡаҙан сире, күреү һәм ишетеү һәләтен юғалтыу кеүек ауырыуҙар ҙа барлыҡҡа килтереүсе булып тора.

● Алкоголдең һәр дозаһы мейе күҙәнәктәренең күпләп үлеүенә килтерә.

● Һыраны бер уртлау - организмдағы биологик һәм психик билдәләрҙең зәғифләнә барыуына, тоҡом боҙолоуға алып бара.

● Һыраны күберәк һәм йышыраҡ эскән һайын, потенциаль ата-әсәнән киләсәктә һау һәм аҡыллы балалар тыуыуына мөмкинлек кәмей.

● Һыраның маҡсаты - күпләп ҡырыу, һәм быларҙың барыһы ла кешенең үҙ аҡсаһына эшләнә. Ҡорбан үҙенең юҡ ителеүе өсөн үҙе түләй!

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Һуңғы йылдарҙа башҡорттарҙың үҙ илен ташлап, күпләп ситкә, хатта сит илдәргә сығып китеүен хупларғамы, хурларғамы?

**(Башы 1-се биттә).**

***Тәнзилә КЕЙЕКБАЕВА, эшҡыуар:*** Кешегә үҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла сит илдәргә сығып сәйәхәт итеп, сит ил тормошон күреп, донъяуи күҙаллауҙы байытып, сит мөхит тормошон өйрәнеп ҡайтыу кәрәк, тип уйлайым мин. Элекке ваҡытта Рәсәй батшалығы ирҙәрҙе, ул осорҙағы йәмғиәткә "зыяны" тейерҙәй аҡыллы шәхестәрҙе Себергә һөргән, ә бөгөн килеп ирҙәребеҙ үҙ теләктәре менән Себергә китһә, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ үҙ теләктәре менән сит илдәргә ялсылыҡҡа китә... Бына ниндәй заманда йәшәйбеҙ бөгөн! Донъя үҙгәрә, тормош, һин теләйһеңме, юҡмы, икенсе йүнәлеш ала. Элек Ер шарында үҙгәртеүҙәр талап итеп, тотош халыҡтар шаулаһа һәм ул беҙҙең илебеҙҙә бөйөк революция менән тамамланһа, бөгөнгө көндә лә тотош илдәрҙә донъяуи үҙгәртеп ҡороуҙар бара. Йәшәү өсөн көрәш бара. Балыҡ эҙләй тәрәнлекте, кеше эҙләй һәйбәт йәшәү юлын. Әҙәмсә йәшәргә теләй кеше! Дөрөҫөн әйткәндә, беҙҙең илебеҙҙә ябай халыҡҡа йәшәүе бик ауыр. Үҙебеҙҙәге етешһеҙлектәр ус эсендәге мәрйен кеүек шундуҡ күҙгә ташлана. Мәҫәлән, ҡала транспортында 2-3 туҡталыш барһаң - түләйһең, төшөп, икенсе йүнәлешкә барыр өсөн автобусҡа ултырһаң, тағы түләргә кәрәк. Йомош менән йөрөйөм тиһәң, автобусҡа ғына түләү өсөн көнөнә 80-100 һум китә. Ә бит эшләмәгән кешенең ҡала транспортына түләргә аҡсаһы юҡ. Ә сит илдә ҡала транспортында йөрөү өсөн бер тапҡыр билет алаһың да, шуның менән әллә нисә тапҡыр автобусты, йәиһә трамвайҙы алыштырып, тотош ҡаланы әйләнеп сығаһың. Ә пенсионерҙарға һәм эшһеҙҙәргә льготалы билет ҡаралған. Нисектер, йәшәүе еңел сит илдә. Бөтәһе лә уйланылған, бөтәһе лә ябай халыҡ өсөн. Унда ябай халыҡты, эшсене һәм крәҫтиәнде яҡлаусы көслө органдар бар, унда закон бар, унда абруйлы профсоюз бар. Ә беҙҙә ябай халыҡты яҡлаусы бер орган да юҡ, ә инде берәй бәләгә тарый ҡалһаң... Аллам һаҡлаһын! Ә кеше йәшәргә теләй. Быға уның тулы хоҡуғы бар! Үҙ илендә кеше йәшәү өсөн төп сығанаҡты таба алмай икән, ул китә бәхет эҙләп сит тарафҡа: ирҙәр - Себергә, ә ҡатын-ҡыҙ - сит илгә... Был да хәҡиҡәт.

***Зәкир ИШМЫРҘИН, Ғафури районы Сәйетбаба ауылы башҡорттарының ҡоролтай етәксеһе:*** Илде ташлап ситкә сығып китеүҙе нисек итеп хуплайһың инде. Күптәр был аҙымдарын сараһыҙҙан, эш юҡлыҡтан китәбеҙ, тип аңлата. Мәҫәлән, Себергә китеп кенә күпме егеттәребеҙ ауырыу булып ҡайта, ә ҡайһылары хатта эскегә бирелә. Элекке зимагорҙар һымаҡ күренеп китә миңә улар. Иленән, ғаиләләренән айырылып, теләһә ниндәй шарттарҙа, төрлө ерҙән йыйылған төрлө кеше араһында йөрөп, үҙ йөҙөңдө лә, башҡортлоғоңдо ла юғалтыу өсөн күп кәрәкмәй, тип уйлайым. Нишләп үҙебеҙҙә эш булмаһын! Елкәң генә булһын - ике ҡулға бер эш кенә табырға мөмкин! Умартасылыҡ менән шөғөлләнгән ир-азаматтарыбыҙҙы ғына килтерәйем миҫалға - сезонына 1-әр миллион табыш алалар. Фәҡәт маҡтауға ғына лайыҡ улар! Ҡулы оҫта кеше мебель, хужалыҡ кәрәк-яраҡтары, йорт төҙөү материалдары етештерә ала. Йә булмаһа, мал көт, ҡаҙ-өйрәк үҫтереп һат - был да эш тә, аш та. Аш, тигәндән, картуф ҡына үҫтереп һатһаң да файҙаһы бик ҙур. Эшләйем, тигән кешегә хәҙер хөкүмәтебеҙ ҙә ярҙам ҡулы һуҙып тора, һәр төрлө субсидиялар бүлә. Башлап китеүе ауырыраҡ булһа ла, ныҡышмалылыҡ һәр саҡ көткән һөҙөмтәне бирәсәк. Күберәк уңышлы эшҡыуарҙар тәжрибәһен, закондарҙы өйрәнергә, бөтә яңылыҡтар һәм мәғлүмәттәр менән хәбәрҙар булырға тырышырға кәрәк. Иң мөһиме - тыуған ерендә, туғандарың, дуҫ-иштәрең араһында ғаиләң менән йәшәйһең. Шуға ла мин эш артынан ситкә киткәндәрҙе хупламайым. Белем артынан киткән йәштәребеҙҙе иһә тыуған ергә ҡабат ҡайтырлыҡ итеп, илһөйәр, ерһөйәр итеп тәрбиәләйек.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ!

# БҮЛӘККӘ - "ДИНИ КАЛЕНДАРЬ"

**Мөхтәрәм милләттәшебеҙ! Бына тағы һине лә, баҫмабыҙҙы ла, ошо баҫманы ижад итеүселәрҙе лә һынау мәле етте. Гәзитебеҙҙе уҡыусы милләттәш туған телдәге баҫманы ниндәй дәрәжәлә һанлай һәм баһалай? Уның үҙ милләтенә, туған теленә ҡарата аң, рух, ихтирамы ниндәй кимәлдә? Баҫмабыҙҙағы һүҙ ҡеүәһе, фекер үткерлеге уның күңелен арбай, сәмен һәм ғәмен уята алырлыҡмы?**

Бына шулай, **2012 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу башланыуын иғлан итеп**, уҡыусыбыҙ һәм үҙебеҙ алдына ошо һорауҙарҙы ҡуябыҙ. Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ ҙә бар: күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға.

**Бынан тыш**, әлбиттә, оптимистар өсөн **бүләктәр ҙә** булмай ҡалмаясаҡ. Оптимистар өсөн, тибеҙ, сөнки гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларҙың "Мин барыбер бүләкһеҙ ҡалмайым!" тигән кешеләрҙән генә килеүен яҡшы беләбеҙ.

"Киске Өфө"нө уҡыусыларҙың барыһының да оптимист булыуын теләйбеҙ, уларҙың ошондай сифаттарын уятыуҙы маҡсат итеп ҡуябыҙ. **Ә октябрь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 30 кешегә 2012 йыл өсөн "Дини календарь" ебәрәбеҙ.**

**Әйткәндәй**, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп**, 2012 йылдың тәүге яртыһына гәзитебеҙҙең 50665 индекслыһына **348 һум 24 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **378 һум 24 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓21 октябрҙә Өфөнөң "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙар йәмғиәтенең "Хәҙерге заманда башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының статусы һәм роле" тип исемләнгән конференцияһы үтәсәк. Форум эшендә республиканың район һәм ҡалаларынан 500 делегат ҡатнашасаҡ.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың киләһе ултырышында Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ҡарамағындағы өсөнсө саҡырылыш Йәштәр йәмәғәт палатаһы составына кандидатураларҙы ҡараясаҡ. Йәштәр йәмәғәт палатаһы 2007 йылда ойошторолған, уның составына 35 кеше инә. Шуларҙың унауһы - республика Президенты күрһәтмәһе менән, 10 кеше - БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Президиумы тәҡдиме буйынса, 15 кеше йәштәр һәм балалар йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре иҫәбенән һайлана. Йәштәр йәмәғәт палатаһы составы ике йылға бер тапҡыр яңыртыла. Ул консультатив һәм кәңәшмә орган булып тора.

✓Сибай телевидениеһы һәм "Атайсал" гәзите Сибай ҡала округы хакимиәте ярҙамында "Атайсалдың ете мөғжизәһе" конкурсын иғлан иткән. Конкурстың беренсе этабында "Мөғжизә" тип аталырға лайыҡ булған объекттар исемлегенә түбәндәгеләр ингән: Талҡаҫ күле (Баймаҡ районы), Мулдаҡ күле (Әбйәлил районы), Турат сағылы (Хәйбулла районы), Ғәҙелша шарлауығы (Баймаҡ районы), Ҡәнифә юлы (Әбйәлил, Баймаҡ, Йылайыр, Хәйбулла райондары буйлап үтә), Ҡайын ҡабаҡ (Хәйбулла районы), Бәйғәмбәр ташы (Йылайыр районы). Исемлеккә шулай уҡ Арҡайым цивилизацияһының Таналыҡ, Олайыр, Оло һаҙ, Селек, Улаҡ ҡаласыҡтары ингән.

✓Ошо көндәрҙә билдәле ҡурайсы Роберт Юлдашев үҙенең ижади коллективы менән Мәскәүҙә булып ҡайтты. Баш ҡалала улар "Культура" бөтә Рәсәй телеканалының халыҡ-ара этно-фолк-рок халыҡ ижады фестивален төшөрөүҙә ҡатнашты. Унда Рәсәйҙең һәм сит илдәрҙең иң яҡшы коллективтары сығыш яһай. Улар иҫәбендә - "Терем квартет", "Пелагея" төркөмө, Игорь Моисеев исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле, Якутиянан "Айархаан" этник ансамбле һәм башҡалар бар. "Культура" телеканалында фестиваль декабрь айында күрһәтеләсәк.

КӨН ҠАҘАҒЫ

**Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, һуңғы ваҡытта демократик һайлауҙарҙың ысын мәғәнәһе үҙгәртелде, һайлау урынына тауыш биреү (йыйыу) тигән төшөнсә алға сыҡты. Һайлау менән тауыш биреү араһында барыбер ҙә айырма бар бит инде ул. Шуға ла ябай халыҡ араһында демократияға булған ҡараш ҡырҡа үҙгәрә бара. Советтар осоронда үткәрелгән һайлауҙар ғәҙелерәк булды, тигән фекер киң тарала. Хәҙергә һайлауҙарға бағлаған өмөттәр һүрелә. Ысынлап та, мәрхүм Василий Шандыбиндан башҡа РФ Дәүләт Думаһында ябай хеҙмәтсәндәрҙән бер генә вәкил дә булманы һәм юҡ. Был хәл төбәк парламенттарына ла хас күренешкә әүерелде. Кеҫәләре ҡалын булған йә үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртҡан депутаттарҙың ябай халыҡты яҡламауы көн кеүек асыҡ бит инде. Депутат мандаты менән үҙ эшен генә яйлап йөрөгән парламентарийҙарҙан дәүләт етәкселәре лә биҙерәгәндер, күрәһең. Бөтә Рәсәй Халыҡ фронты ойошторолоуына ла ошо сәбәпсе булып сыҡты кеүек.**

# ЭШ ХАҠЫ... ТӘҢРЕ ХАҠЫ,

## йәки уның күләме ғәҙелме?

Һайлауҙар яҡынлашҡан һайын бөгөнгө Рәсәй дәүләте алдында торған көнүҙәк мәсьәләләр тураһында "борсолған", ошо хаҡта төрлө трибуналарҙан тороп телмәр тотҡан сәйәсмәндәр ҙә күбәйгәндән-күбәйә бара. Нисек кенә булмаһын, һайлауҙарҙың ыңғай йоғонтоһо бар: йылдар буйы хәл ителмәгән йә бөтөнләй инҡар ителгән мәсьәләләрҙе күтәреп сыҡмайынса тороп, халыҡ ышанысын яулап булмаясағын аңлаған сәйәсмәндәр, партиялар кемуҙарҙан уларҙың теге йәки был хәл итеү юлдарын тәҡдим итәсәк. Был осраҡта ябай халыҡтың төп бурысы - сираттағы популистик тоҙаҡҡа эләкмәй, дөрөҫ тауыш биреү. Был тоҙаҡтағы иң "тәмле" алдатҡыс ем - ул "эш хаҡын күтәрәбеҙ" тигән вәғәҙә. Һайлаусыларҙың күпселегенең тапҡан-таянғаны ошо эш хаҡының кимәле менән бәйле. Эш хаҡынан тыш, уларҙың завод-фабрикалары, нефть-газ скважиналары, урман-ерҙәре, яхта-самолеттары юҡ. Уларҙың берҙән-бер "байлығы" - тауыш биреү хоҡуғы ғына бар. Ошо берҙән-бер хоҡуҡты файҙаланыуға уның, балаларының, тыуған иленең киләсәге бәйле.

Шуға ла бөгөн Дәүләт Думаһына депутатлыҡҡа дәғүә итеүселәрҙең дә, Владимир Путиндың да, Дмитрий Медведевтың да ең һыҙғанып эш хаҡын күтәрергә булып китеүҙәре аңлашыла. Эш хаҡын 2014 йылға уртаса 32 меңгә еткереү өсөн йылына ул уртаса 10-12 процентҡа артырға тейеш. Ләкин шуныһы: ул 10-12 проценттың 5-6 процентын инфляция ашап торасаҡ бит. Владимир Путинға был мәсьәләне хәл итеү өсөн ниндәйҙер бик үҙенсәлекле саралар ҡабул итергә кәрәк буласаҡ. Был саралар тураһында ул аныҡ ҡына итеп әйтеп бөтмәй әле. Уның төп йүнәлеше булып әле алып барылған иҡтисади сәйәсәтте ҡырҡа үҙгәртеү тора. Халыҡ был юҫыҡта Путинға буласаҡ һайлауҙарҙа ярҙам күрһәтһә, уның Ельцин башлап ебәргән сәйәсәтте үҙгәртергә ихтыяры етер, тигән ышаныста ҡалырға була.

Эш хаҡын күтәреү буйынса тәүге аҙымдар яһала башланы. Бөтә төбәк етәкселәренә ашығыс бурыс ҡуйылды: йыл аҙағына тиклем уҡытыусыларҙың эш хаҡын төбәктәге уртаса эш хаҡына еткерергә. Ләкин эш хаҡын арттырыуға башҡалар ҙа мохтаж. Бюджетта аҡса юҡ, тигән һылтаныу урынһыҙ: ресурстар эҙләргә һәм табырға кәрәк. Нисәмә йыл инде, мәҫәлән, прогрессив һалым индереү тураһындағы мәсьәлә хәл ителмәй килә. Дәүләт алдында килеп тыуған ҡыйынлыҡтар арҡаһында донъяның иң бай кешеләренең береһе Уоррен Баффет АҠШ-тағы һалым системаһының ғәҙел булмауын белдәләп, байҙар һалымды күберәк түләргә тейеш, тип күтәреп сыҡты. Барак Обама был тәҡдимде хупланы һәм парламентҡа тейешле закон проектын ебәрә һалды. Ә Рәсәйҙә килемдәр буйынса айырма ҡурҡыныс кимәлгә етте: халыҡтың күпселеге бөлгөнлөккә төшкәндә, байҙар аҡсаларын ҡайҙа ҡуйырға белмәй. Кем алтын унитаз эшләтә, кем кәстрүлен аҫыл таштар менән биҙәтә.

Эш хаҡының социаль-иҡтисади асылын тулыһынса аңлап етмәү ҙә дөрөҫ сәйәсәт алып барырға ҡамасаулай. Был хата дәүләт етәкселәренә генә түгел, фән докторы дәрәжәһендәге иҡтисадсыларға ла хас. Тәү ҡарашҡа, эш хаҡы үтәлгән эштең етештереүсәнлеге һәм сифаты менән бәйле кеүек. Уның эште башҡарғандан һуң түләнеүе лә ошо ҡараште нығыта. Әммә был фәнни яҡтан дөрөҫлөккә тап килеп етмәй. Эш хаҡы эш өсөн түләнә, тигән ҡараш айырым предприятие, ойошма, учреждение кимәлендә генә дөрөҫ булһа, йәмғиәт, дәүләт кимәлендә ҙур хата булып тора. Был хата Рәсәйгә иҡтисад өлкәһендә "осорға" мөмкинлек бирмәй.

Эш хаҡының асылы нимәлә тора һуң? Әгәр ҙә ул эш өсөн түләнһә, һәр кем үҙ эшен яҡшы, сифатлы һәм һөҙөмтәле итеп башҡарырға тырышыр ине. Эшһөйәрҙәрҙе иҫәпкә алмаһаң, эшкә ашҡынып торған кешене күҙ алдына килтереүе ауыр. Хатта ғаилә эсендә үҙ файҙаңа башҡарыла торған дөйөм эш тә артыңдан ҡарап тороусы атай-әсәй булмаһа, башҡарыла һалып бармай. Ялланып эшләгән эш тураһында әйтеп тә тормайым: даими контроль һәм күҙәтеү булмаһа, берәүҙең дә тырышып эшләгәнен осратмаҫһың. Берәй офис хеҙмәткәрҙәрен күҙәтеп ҡарағыҙ: улар йә ләстит һата, йә интернетта ултыра. Тимәк, эш хаҡы икенсе нәмә өсөн түләнә. Бер генә йәмғиәт тә кеше хеҙмәтенән башҡа йәшәй алмай, шуға ла ул хеҙмәт, эшсе ҡулдар дәүләттең байлығы итеп ҡаралырға һәм лайыҡлы эш хаҡы менән тәьмин ителергә хоҡуҡлы. Баҙар иҡтисадында ялланып эшләгәндәр үҙҙәренең берҙән-бер байлығы булған эшсе ҡулдары өсөн лайыҡлы, ғәҙел хаҡ алырға тейеш. Ул хаҡ уның үҙенең төп ихтыяждарын (ашап-эсеү, кейенеү, торлаҡ, һаулыҡ, белем алыу, ял итеү, ғаиләһен ҡарау һ.б.) лайыҡлы кимәлдә тәьмин итеүгә етергә тейеш. Уртаса эш хаҡына бер бүлмәле фатир һатып алыр өсөн уны башҡа нәмәгә тотонмай ғына кәмендә утыҙ йылдан ашыу тупларға кәрәк. Әлбиттә, быны өсөн ул үҙ эшен тейешле кимәлдә башҡарырға тейеш.

Социологтар тикшереүе буйынса, уртаса эш хаҡы ун мең һум тирәһе тәшкил итә. Был рәсми күрһәткестән (Башҡортостан буйынса 17 мең 200 һум) байтаҡҡа кәмерәк. Нормаль йәшәү өсөн айына 30 мең һум аҡса кәрәк, тип һанайҙар. Өс кешенән торған ғаилә айына 56 мең һум аҡса алырға тейеш, тимәк. Һеҙҙең таныштар араһында ошондай ғаиләләр йыш осраймы?

Әгәр ҙә лайыҡлы эш хаҡын айына 25-30 мең тип алғанда, рәсәйлеләргә күпме түләп еткермәйҙәр икәнен үҙегеҙ күреп тораһығыҙ. Ә һуңғы сумма мотлаҡ кәрәк. Кешегә уны эш хаҡы рәүешендә түләмәһәләр, ул уның икенсе төрлө юлын эҙләйәсәк һәм табасаҡ. Кемдер өҫтәмә эш эҙләйәсәк, кемдер урлашасаҡ, кемдер үҙ эш урынында ришүәтселек юлына баҫасаҡ. Был юлдарҙың осо-ҡырыйына сығырлыҡ түгел. Уларҙың бөтәһенә лә хас уртаҡ сифат: улар ғәҙеллек принцибына яуап бирмәй. Бер нисә урында эшләү эштең сифатына кире йоғонто яһай, ҡалғандары кешене әхлаҡи яҡтан боҙа. Дәүләтебеҙҙә урлашыу, ришүәтселек, коррупция ғәҙәти күренешкә әүерелде. Һуңғы ваҡытта аҡсаны "эшләүҙең" был юлдары ла әллә ни һөҙөмтә бирмәй башланы. Күптәр өҫтәмә эштән баш тарта. Йәмғиәттә яңы күренеш - итальян забастовкаһы - барлыҡҡа килде. Был забастовка ваҡытында кеше эшкә сыға, әммә үҙ бурыстарын формаль рәүештә атҡарыу арҡаһында дөйөм эш башҡарылмай. Уларҙы эштән ҡыуыу өсөн законлы нигеҙҙәр юҡ. Бер нисә предприятиела барған был протест киң матбуғат сараларында әллә ни яҡтыртылмай. Эш хаҡының түбән булыуы сәбәпле профессор урынына операцияны ассистент эшләй, доцент урынына кисәге студент лекция уҡый, командир урынына самолетты иҫерек штурман йөрөтә. Күптәр эш хаҡын арттырам тип, юғары белем, фән кандидаты, докторы дәрәжәләрен ала, берәй өлкәлә атҡаҙанған эшмәкәр титулын алыу өсөн бөтә көсөн түгә. Күп осраҡта был "ҡағыҙҙарҙың" еңел юлдар менән алынғаны мәғлүм.

Рәсәй кешеһе өсөн йән аҫырауҙың тағы ла бер яңы төрө киң таралыу алды. Эш хаҡының бик түбән булыуы арҡаһында алты миллиондан артыҡ (!) кеше эш урыны эҙләп маташмай, өйҙә түшәмгә төкөрөп ята. Улар рәсми статистика буйынса эшһеҙҙәр тип иҫәпләнмәй. Кем атаәсәһенең пенсияһына, кем кеше талап, урлашып көн күрә. Кемдер уларҙы ялҡаулыҡта ғәйепләп маташа. Алты миллион кешене ялҡау тип әйтеүе дөрөҫ булмаҫ. Кеше үҙенең эшсе ҡулдарын осһоҙға ғына һатырға теләмәй. Хеҙмәт баҙары гастарбайтерҙар менән тулды. Үҙебеҙҙең халыҡҡа эш юҡ. Телевизорҙан бер фермерҙы күрһәтәләр. Помидорға хаҡтарҙың түбән булыуы сәбәпле, ул өлгөргән мул уңышты сығарып һатыуға ҡарағанда, баҫыуҙа ултырған көйөнә серетергә ҡарар итә. Ошо фермер һымаҡ, күп йәштәр вуздан һуң эш урыны эҙләмәй, өйҙә ятыуҙы хуп күрә. Был деградация эш хаҡының үтә лә түбән булыуының тура һөҙөмтәһе. Эш хаҡының түбәнлеге баҙар иҡтисады талаптарына тап килмәгән саралар ҡулланыуға алып бара. Үҙ эш вазифаларын намыҫлы башҡарған өсөн лайыҡлы аҡса алған кешегә төрлө типтағы льготалар (бушлай дәреслектәр, дарыуҙар, "әсәлек капиталы") кәрәкмәҫ тә ине. Күптәр бер нисә урында эшләүен ташлап, үҙенең ғаиләһенә, квалификацияһын арттырыуға иғтибарҙы күберәк бүлер ине. Ә ул бушатҡан урындарға эшһеҙҙәрҙән булған сират һиҙелерлек кәмер ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республика суверенитетына арналған тантаналы йыйылышта:" Ябай кешене һәр көн ғаиләһен нисек ашатыу, балаларын кейендереү, уларҙы торлаҡ менән тәьмин итеү, яҡшы белем биреү, ҡарт ата-әсәһенә ярҙам итеү һәм башҡа бик күп мәсьәләләр борсой. Ошоларҙы хәл итеү властың төп бурысы булып тора. Бөтә ҡалған эштәр икенсе планда", - тине. Ошо һүҙҙәрҙе дауам итеп, власть алдына ҡуйылған был мәсьәләләр - эш хаҡының функцияһы, тип аныҡлап ҡуяйыҡ. Власть лайыҡлы эш хаҡы талап итһә, бөтә ҡалған мәсьәләләр, шул уҡ модернизациялау, инновациялау, нанотехнологиялар үҙенәнүҙе хәл ителәсәк. Шуға ла эш кешеһенә лайыҡлы эш хаҡы киләсәк һайлауҙарҙың төп девизына әйләнергә тейеш.**

**Илдар ҒӘБИТОВ,**
**иҡтисад фәндәре кандидаты.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Яңыраҡ РФ Президенты Дмитрий Медведев Рәсәйҙең Сүриәләге илсеһе вазифаһына яҡташыбыҙ Азамат Ҡолмөхәмәтовты тәғәйенләне. Азамат Рәхмәтулла улы Башҡортостандың Нуриман районында 1953 йылда тыуған, баш ҡалала үҫкән. Өфөләге 91-се мәктәпте алтын миҙалға тамамлаған. 1978 йылдан алып СССР Сит ил эштәре министрлығының Үҙәк аппаратында, Рәсәй Сит ил эштәре министрлығында, бүтән дәүләттәрҙә төрлө кимәлдәге дипломат вазифаларында эшләй. Тамырҙары менән Ишембай районының Ҡанаҡай ауылынан. Азамат Рәхмәтулла улының олатаһы - күренекле шағир Яҡуп Ҡолмойҙоң бер туған ағаһы Фәтҡулла. Ул 1943 йылда Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған.

✓Экология һәм йәшәйеш хәүефһеҙлеге халыҡ-ара фәндәр академияһы ҡарары менән "Янғантау" шифаханаһы Фәндәр академияһы дипломы менән бүләкләнде. Былдай юғары баһаға Башҡортостан шифаханаһы ил халҡын сәләмәтләндереү буйынса әүҙем эшләгәне өсөн лайыҡ булды.

✓Баймаҡта республика мосолмандарының Диниә назаратының күсмә пленумы үткәрелде. Пленум барышында Башҡортостан Республикаһы мосолмандары Диниә назаратының Урал аръяғы вәкиллегенә яңы етәксе - Сибай ҡала округы Төйәләҫ ауылы мәсетенең имам-хатибы Ислам Исламбаев тәғәйенләнде. Баймаҡ ҡалаһындағы мәсет етәксеһе итеп Сибайҙың Алтын ҡасабаһы мәсете имам-хатибы Баймөхәмәт Ғиззәтуллин һайланды.

✓"Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре" исемен алыу еңеләйә. Хәҙер был маҡтаулы исемде алыу өсөн сәнғәт өлкәһендә элекке кеүек 15 түгел, ә 10 йыл эшләргә кәрәк. "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре" исемен режиссер, балетмейстер, дирижер, хормейстер, композитор һәм сәнғәттең башҡа өлкәһендә эшләүсе кешеләр алырға мөмкин. Быйың өсөн коллектив йәки урындағы власть ошондай инициатива менән сыға һәм тәҡдимде Башҡортостан Республикаһы Президенты янындағы дәүләт наградалары һәм почетлы исемдәр комиссияһы ҡарай. Әйткәндәй, әгәр кеше исемде тейешһеҙ алһа йәки ниндәйҙер әхлаҡһыҙлыҡ ҡылһа, "атҡаҙанған" исеменән мәхрүм ителергә лә мөмкин.

✓ Өфө архитекторҙары биш ҡатлы йорттар өҫтөнә тағы ла дүрт ҡат эшләү хаҡында уйлана. Өфө - Рәсәйҙә бындай технология ҡулланған тәүге ҡала буласаҡ. Төҙөлөш ваҡытына фатир хужаларына бер ҡайҙа ла күсенергә кәрәкмәй.



ТӨРЛӨҺӨНӨН

## ҠАҘНА ХӘЛДӘРЕ БАРЛАНА

**Республика 2012 йылға бюджет ҡабул итергә әҙерләнә. Уға ярашлы, төбәктә 30 мең өҫтәмә эш урыны барлыҡҡа киләсәк һәм бюджет өлкәһендә эшләүселәрҙең эш хаҡы 15 процентҡа артасаҡ. Киләһе йыл өсөн бюджет БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары тарафынан ағымдағы йылдың 20 октябренә тиклем раҫланасаҡ.**

Киләһе өс йылда власть органдары 30 мең яңы эш урыны булдырырға һәм 268 миллиард һум күләмендә инвестиция йәлеп итергә планлаштыра. Шулай уҡ республика нефтҡә бәйлелекте лә әйләп кәметергә планлаштыра. Яғыулыҡ-энергетика комплексының сәнәғәттәге өлөшө йылдан-йыл кәметеләсәк. Шул уҡ ваҡытта машиналар төҙөү һәм башҡа файҙалы ҡаҙылмалар сығарыу арттырыласаҡ. Республикала уртаса эш хаҡы 26950 һум, ә бюджет өлкәһендә эшләүселәрҙеке 22400 һум тәшкил итәсәк, тип вәғәҙә итәләр. Республика бюджетына бөтәһе 286,9 миллиард һум йыйып алыу планлаштырыла. Был быйылғы йыл менән сағыштырғанда биш миллиардҡа күберәк. Ләкин был миллиардтарҙың күп өлөшө федераль бюджетҡа китәсәк һәм беҙгә барлығы 113,9 миллиард һум ҡаласаҡ. Сығымдар иһә 128,9 миллиард буласаҡ, тип планлаштырыла, был ағымдағы йыл менән сағыштырғанда 9,5 миллиардҡа күберәк тәшкил итә. Уларҙың 76,7 миллиарды мәғариф, медицина, төрлө пособие һәм өҫтәмә түләүҙәргә тотоноласаҡ. Дефицит 15 миллиард һум тәшкил итәсәк.

## МӘКТӘП АШХАНАҺЫНДА...

**Ошо көндәрҙә Роспотребнадзор йәшелсә менән тәьмин итеүсе предприятиеларҙы тикшереү һөҙөмтәһе менән таныштырҙы. Тикшереү республиканың 153 ойошмаһында уҙған.**

Тикшереү барышында алынған пробаларҙың 7 процентында нитраттар күләме норманан артыҡ булып сыға. Шуны билдәләп үтергә кәрәк: нормаға тура килмәгән пробаларҙың барыһы ла ауыл мәктәптәрендә алынған. Ә билдәле булыуынса, ауыл мәктәптәре ашханаларында, гәҙәттә, мәктәп яны биләмәһендә үҫтерелгән йәшелсә-емеш тотонола. Ҡара исемлеккә Иглин, Нуриман, Өфө һәм республиканың башҡа күп районддары эләккән. Бәхеткә күрә, ағыулы уңыш мәктәп уҡыусылары өҫтәленә эләкмәгән, сөнки тикшереүҙәр август айында - каникул ваҡытында уҙғарылған һәм тикшереү һөҙөмтәһе буйынса барлыҡ нитратлы йәшелсәләр ҡулланыуҙан алынған. Әлеге ваҡытта белгестәр нитраттарҙың барлыҡҡа килеү сәбәбен асыҡлай. Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралағында белдереүҙәренсә, өс тоннаға яҡын йәшелсәне һатыуға сығарыу тыйылған, сөнки уларҙың гигиена талаптарына тура килмәүе генә түгел, хатта сифатын һәм хәүефһеҙлеген аныҡлаусы документтар ҙа булмай сыҡҡан. Административ хоҡуҡ боҙоу хаҡында 27 эш ҡуҙғатылған. 19 хоҡуҡ боҙоусы 27,5 мең һум күләмендә штраф түләгән.

ЙӨҘӨН КҮРЕП, ЙӨҘ ОЯЛМАҺЫН!

# ЯҢЫ БИҪТӘЛӘ...

## Амстердам, Рим һәм Токио

**Оҙаҡламай Башҡортостандың баш ҡалаһында "Яркий" ("Яҡты") тип аталған яңы биҫтә барлыҡҡа киләсәк. Төҙөлөш эштәре 2012 йылдың яҙында башланып, 2019 йылда тамамланасаҡ, тип күҙаллана. Яңы биҫтә Дим районында, Кустаревский һәм Танағуш күлдәре араһында урынлашасаҡ.**

- Әлеге көндә буласаҡ биҫтә территорияны һыу аҫтында һәм ул яһалма рәүештә күтәреләсәк, - ти проект авторы Дмитрий Винкельман. Биҫтәлә төрлө төҫтәге бәләкәй ҡатлы йорттарҙан торған 14 квартал буласаҡ. Уртала 9-10 ҡатлы, улар тирәләй 3-8 ҡатлы, ә "Дим - Өфө" трассаһы буйында ике төркөм 12-14 ҡатлы һәм биш 22 ҡатлы йорттар урынлаштырыласаҡ, йәғни барлығы һигеҙ мең фатирҙы үҙ эсенә алған 700 мең квадрат метр торлаҡ йорт төҙөләсәк.

"Яҡты" биҫтәһе ысын мәғәнәһендә сағыу - һары, йәшел, алһыу, зәңгәр, күк, ҡыҙғылт һары төҫтәге йорттарҙан торасаҡ. Архитекторҙар уйы буйынса, биҫтәлә "Токио", "Рим" һәм "Амстердам" атамалы райондар барлыҡҡа киләсәк. Биҫтәлә 4 мәктәп, 8 балалар баҡсаһы, сауҙа үҙәге, бассейнлы спорт комплексы, балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбе, поликлиника буласаҡ.

- Шулай уҡ биҫтәлә йәйәүлеләр өсөн урам эшләүҙе күҙ уңында тотабыҙ. Ул урам сауҙа үҙәген һәм ике күлде бәйләйәсәк. Тағы ла йәйәүлеләр өсөн юл өҫтө юлдары, күп кимәлле һәм ер өҫтө машиналар ҡуйыу урыны төҙөләсәк, - ти проект етәксеһе Артур Урманцев. - Әлеге көндә Дим биҫтәһен "Һамар - Өфө - Силәбе" магистрале менән бәйләйәсәк яңы трасса проектлана. Юл яңы биҫтә буйлап үтәсәк һәм унда йәшәүселәр бер нindәй ауырлыҡһыҙ трассаға сығасаҡ.



## "ХРУЩЕВКАЛАР"ҒА...

### яңы ҡаттар өҫтәмәкселәр

**Яҡын киләсәктә баш ҡалалағы иҫке биш ҡатлы йорттар урынына яңы һәм бейек йорттар ҡалҡып сығасаҡ, тип күҙаллана.**

Өфө архитекторҙары биш ҡатлы йорттар өҫтөнә тағы ла дүрт ҡат эшләү хаҡында уйлана. Өфө - Рәсәйҙә бындай технология ҡулланған тәүге ҡала буласаҡ. Барлыҡ тиерлек иҫке йорттарҙың стенаһында ярыҡтар бар, торбалар серегән, түбәләре һыу үткәрә Шулай уҡ төҙөүселәрҙең был технологияны ҡулланыу өсөн тағы ла бер ныҡлы дәлиле бар. Октябрь проспектында тикшерелгән ошондай йорттарҙың йылы юғалтыу күләме 40 процент тәшкил итә, тимәк, йылыһының яртыһы тиерлек өйҙәргә түгел, ә урамды йылыта, ә фатир хужалары урамды йылытҡан өсөн аҡса түләй булып килеп сыға.

Архитекторҙарҙың уйы ябай: әле булған бина тышынан яңы "үҙаллы" стена төҙөлә һәм ул иҫке өйҙә һәм фундаменты һаҡлаясаҡ. Йәғни өҫтәләсәк ҡаттар әле булған бина өҫтөнә төҙөлмәйәсәк, ә яңы фундаментҡа таянасаҡ. Шул уҡ ваҡытта төҙөлөш ваҡытына фатир хужаларына бер ҡайҙа ла күсенергә кәрәкмәй, сөнки реконструкция өсөн төҙөлөш тауышын һәм бысракты минимумға еткергән яңы махсус технология һәм ҡоралмалдар ҡулланыласаҡ.

- Бындай яңыртылған өйҙәр икенсе һулыш аласаҡ һәм тағы ла 50 йыл тирәһе хеҙмәт итәсәк, - ти Рәсәйҙең атҡаҙанған архитекторы Леонид Дубинский.

Төҙөүселәр архитекторҙар менән берлектә төҙөлөш эше алып барырҙай өйҙәрҙе "күҙләп" ҡуйған һәм кәрәкле тикшереүҙәр үткәрәсәк. Шулай уҡ яңыраҫаҡ йорт хужалары менән дөйөм йыйылыш үткәреләсәк, сөнки милексенең ризалығынан тыш ниндәйҙер эштәр алып барыуға бер кемдең дә хоҡуғы юҡ. Бер өйҙө яңыртыуға яҡынса 6-7 ай кәрәк буласаҡ. Беренсе йорт бындай үҙгәртеүгә 2012 йылда уҡ дусар ителәсәк, тип күҙаллана. Бындай яңылыҡҡа фатир хужалары араһында ыңғай ҡараусылар ҙа бар, ләкин кире ҡағыусылар ҙа етерлек.

## ҒАФУРИ ПАРКЫНАН...

### һыра китә

**Ғафури паркынан һыра һатыу палаткалары һәм урамдарҙан һүҙылмалы рекламалар алынасаҡ. Был хаҡта Өфө ҡала округы хакимиәтенең коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы етәксеһе урынбаҫары Ришат Шәкирйәнов белдерҙе.**

Шул уҡ ваҡытта урам ситендәге реклама таҡталары ҡаласаҡ. Бөгөнгө көндә уларҙың һаны 1200-гә етә. Шулай уҡ ҡаланың үҙәк урамдарында махсус һауыттарға ултыртылған ҡыуаҡлыҡтар урынлаштырыласаҡ. Бындай юл менән власть органдары быйыл ҡырҡылған 70 ағасты компенсацияларға уйлай.

Ҡала халҡы өсөн тағы ла бер шатлыҡлы хәбәр - өфөләләр һәм баш ҡала ҡунаҡтары яратып ял иткән Ғафури паркы ике өлөшкә - балалар һәм спорт майҙандарына - бүленәсәк. Был проектҡа ярашлы, Октябрь проспектынан Блюхер урамына тиклемгә арала парк бары тик балалар өсөн генә буласаҡ. Унда төрлө аттракциондар урынлаштырыласаҡ, уйнау майҙансыҡтары буласаҡ. Һыра һатыусы палаткалар һәм кафелар бөтөнләй алынасаҡ. Ә Блюхер урамынан тимер юлға тиклемге территория спорт менән шөғөлләнергә яратыусылар өсөн ҡулайлаштырыласаҡ. Унда ҙур спорт комплексы, саңғы юлы төҙөләсәк һәм яр буйы төҙөкләндереләсәк.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Башҡортостан Республикаһы дәүләт бюджет һәм дәүләт автоном учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын арттырыу тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы, 1 октябрҙән республика бюджет учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы 6,5 процентҡа күтәрелә.

✓Башҡортостан Президенты "Мәктәпкәсә белем биреүҙең төп мәғариф программаһын тормошҡа ашырыусы дәүләт һәм муниципаль мәғариф учреждениелары хеҙмәткәрҙәрен социаль яҡлауҙы арттырыу буйынса саралар тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы. Уға ярашлы, 1 октябрҙән мәктәпкәсә йәштәге балалар менән эшләүсе тәрбиәселәрҙең эш хаҡына ай һайын түләнә торған өҫтәмә аҡса күләме ике тапҡырға арта. Бынан тыш, документҡа ярашлы 1 октябрҙән төп эш урыны буйынса мәғариф учреждениелары штатында торған башҡа педагогик хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡына ай һайын бирелә торған 2000 һум өҫтәмә билдәләнә.

✓Ошо көндәрҙә республика Хөкүмәте Премьер-министры Азамат Илембәтов етәкселегендәге рәсми делегация эш сәфәре менән Италияла булды. Осрашыу һөҙөмтәһендә Благовещенда металлургия заводы төҙөү хаҡында килешеүгә ҡул ҡуйылды.

✓Башҡортостанда таксистарға лицензиялар киләһе аҙнанан бирелә башлаясаҡ. Республиканың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе урынбаҫары Андрей Быковский һүҙҙәре буйынса, заявка биреүселәрҙән документтар ҡабул итеү һәм лицензиялар юллау өсөн программа әҙер тиерлек. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, такси тураһындағы яңы закон сиктәрендә лицензиялар биреү менән урындағы башҡарма власть органдары шөғөлләнәсәк. Төбәктә лицензия 800 һум торасаҡ, ҡулланыу срогы - 5 йыл.

✓Екатеринбургтың "Лукоморье Пикчерз" анимацион фильмдар студияһы Александр Пушкиндың "Руслан һәм Людмила" поэмаһына пролог буйынса ҡыҫҡа метражлы фильм өҫтөндә эшен тамамланы. "У лукоморья..." йәнһүрәте 25 телдә, шул иҫәптән башҡорт телендә лә донъя күрҙе. Йәнһүрәтте башҡорт теленә тәржемә итеүҙә Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығы һәм "Башҡортостан" киностудияһы ярҙам иткән.

✓ *Айыу төндә килеп, башмаҡты йыҡҡан да, ситкәрәк һөйрәтеп алып китеп, күмеп ҡуйған. Шунан көн дә төнөн ҡорбаны артынан килә икән. Йәшен йәшәгән ҡарт айыу булған ул. Мылтыҡтан атып ҡурҡытһалар ҙа ҡасмай икән.*

*ҠАРА ҺИН УНЫ!*

# АҪЫРАҒАС, АҪЫРАҒАС...

## малыңды айыуға үләкһә итмә

**Ошо арала Иштуған яҡтарына юл төштө. Салт ҡояшлы көн, уңышҡа тулышҡан баҡсалар, күркәм ихаталар - бөтәһе лә күңелде күтәрә. Хозур тәбиғәт ҡосағында төпләнгән ауылдың матурлығына һоҡланып туйырлыҡ түгел! Халҡы ла тырыш, киң күңелле. Ниндәй генә проблема килеп сыҡһа ла, иштуғандар бирешмәй, емертеп донъяһын көтә, татыу йәшәй.**



Иң башта урындағы хакимиәткә инеп сығырға булдыҡ. Шунда ҡоймалағы иғлан иғтибарҙы йәлеп итте: "Һаҡ булығыҙ! Балаларҙы ауылдан ситкә, урманға үҙҙәрен генә ебәрмәгеҙ, Малығыҙҙы бикләп тотоғоҙ. Тирә-яҡта айыуҙар күбәйҙе", - тип яҙылғайны унда. Эш буйынса ҡалаға йүнәлгән хужаларҙы тура килтерә алмаһаҡ та, китапханасы Зәлиә Камалетдинова беҙҙе ихлас ҡаршыланы. Әлбиттә, ауыл яңылыҡтары менән ҡыҙыҡһыныуыбыҙ, тәү сиратта, ҡурҡынысты иҫкәртеүсе иғландан башланды.

- Үҙем күргәнем булмаһа ла, юл буйында, зыярат эргәһендә айыу йөрөгәнен шәйләгән кешеләр бар. Улай ғына ла түгел, был ҡырағай хайуан малдарҙы ҡыра. Күңелһеҙ осор кисереп торабыҙ әле бына, - тип һөйләне китапханасы.

Айыуҙан зыян күргән кешеләр менән дә һөйләшеп китергә уйлап, Илдар Ҡунакбаевтар йортона юлландыҡ. Ни йомош менән йөрөүебеҙҙе әйткәс, хужа хәсрәте менән уртаҡлашты.

- Ҡышлыҡҡа май йыйған януарҙы ла ғәйепләп булмай инде, ас бит инде улар. Үҙебеҙ ғәйепле. Малдарҙы сығарып ебәреүен ебәрәбеҙ ҙә, ваҡытында эҙләп алмайбыҙ. Бәләгә юлыҡҡан кистә бер башмаҡты таптым, икенсеһе күҙҙән яҙлыҡҡайны. Көнбағыш баҫыуы эргәһендә ботарланған үгеҙемде иртән генә барып таптым... - тине ул көйөнөп.

Илдар Ҡунаҡбаев һәм зыян күреүсе тағы бер ағай - Рафиҡ Әлмөхәмәтов менән айыуҙың йыртҡыслығына дәлил урынды барып күрергә булдыҡ.

- Әллә ниңә гел үгеҙҙәрҙе генә йыға айыу, - тип һөйләне әңгәмәселәребеҙ юл ыңғайында. - Күрәһең, үгеҙҙәр унан ҡасмай, көс һынашып маташалыр. Хәйер, аҙбарға ҡайтмай, яланда ҡуна ҡалған малға һөжүм итеүе ауыр түгел инде януарға.

Ниһәйәт, йыртҡыстан таланған үгеҙ үләкһәһенә килеп еттек. Сәйнәлгән боғаҙ, бүҫелгән ҡорһаҡ, һынған һөйәктәренә ҡарағанда, алыштың бик ҡурҡыныс барғанына инанаһың. Айыу, ғәҙәттә, ҡорбанын еҫләнеп тарҡала башлағас ҡына ашай. Күмеп ҡуйырға уйлапмы, түшкәне 20 метр тирәһе һөйрәп ҡараған. Икенсе үләкһә көнбағыш баҫыуы сигендә ята, ун биш көн эсендә унан ҡоро һөлдә генә ҡалған.

Айыу күберәк ауылдан 500-600 метр алыҫлыҡтағы зыярат эргәһендә һунар итә икән. Ауылға яҡын булғанлыҡтан, айыуҙың үкерә-үкерә малды аҡыртҡанын күптәрҙең ишеткәне бар. Улар фаразлауынса, ауыл тирәләй 3-4 баш айыу йөрөй. Иң ҡурҡынысы - улар йылдан-йыл арта һәм шәхси хужалыҡҡа зарар килтерә. Август айында ғына биш башмаҡтың башына етеп, Һыртлан ауылында бер атты яралаған. Кешеләр әйтеүенсә, айыуҙар йыл да ошо мәлдәрҙә малға һөжүм итә. Йоҡоға китер алдынан май йыя, күрәһең. Элек бер-ике баш менән сикләнһә, быйыл иһә тамам ҡоторғандар.

Айыуҙы атыу тыйылғанға күрә, урмандарҙа улар күпләп үрсегән, ә болан, мышылар, киреһенсә, кәмегән. Ни сәбәпле ауыл тирәһенә эйәләшеүҙәрен аңлауы ауыр түгел. Урман хужаһы ас һәм ауыл тирәһендә анһат ҡына аҙыҡ табып булыуын яҡшы белә. Иштуған халҡы януарҙы түгел, тәү сиратта үҙен вайымһыҙлыҡта ғәйепләй. "Айыу беҙҙе тәртипкә өйрәтә, ә беҙ һаман тәртипкә күнә алмайбыҙ, ҡурҡыныс барын белә тороп, малдарыбыҙҙы иректә йөрөтөүҙе дауам итәбеҙ", тиҙәр. Ысынлап та, ас януарға бер ниндәй ҡаршылыҡ юҡ ауылдар халҡы тарафынан. Януар хатта малды ҡуранан да алып сығып китә ала. Рафиҡ ағай бынан бер нисә йыл элек булған хәлде һөйләне: "Бер ауылдаш иртәгә салырға тип ниәтләгән башмағын картуф баҡсаһына бәйләп ҡуйған. Таң атыуға малынан елдәр иҫкән. Айыу төндә килеп, башмаҡты йыҡҡан да, ситкәрәк һөйрәтеп алып китеп, күмеп ҡуйған. Шунан көн дә төнөн ҡорбаны артынан килә икән. Йәшен йәшәгән ҡарт айыу булған ул. Мылтыҡтан атып ҡурҡытһалар ҙа ҡасмай икән. Мәскәүҙән рөхсәт алып, януарҙы саҡ тоттолар..."

- Колхоз тарҡалғаны бирле геүләп йөрөгән техника юҡ, көслө тауыштан һаман да шөрләйҙәр ине әле урман януарҙары, - тип өҫтәп ҡуйҙы Рафиҡ ағай.

Малдың тәмен белгән януар яратҡан биләмәһен әле генә ҡалдырып китмәҫ кеүек. Йорт хайуандары ғына түгел, бында кешенең дә ғүмере хәүеф аҫтында. Балан, бәшмәккә йөрөүе ҡурҡыныс. Был мәсьәләгә күҙ йомоп ҡарарға ярамайҙыр, әлбиттә, сиселеш юлдарын эҙләргә кәрәктер. Иң мөһиме, хужалар шундай ауыр көс менән үҫтергән малының хәүефһеҙлеге тураһында үҙе хәстәрләргә тейештер.

**Әлиә ӘМИРОВА.**
**Мәләүез районы.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

## ЭШҺЕҘ БУЛАРАҠ ҠАРАЛА

**Ғариза яҙып, эшемдән сыҡҡас, ауырға ҡалғанымды белдем. Хәҙер миңә декрет һәм пособие аҡсаһы нисек түләнәсәк? Эшләгән саҡтағы эш хаҡым иҫәпкә алынырмы әллә эшһеҙ булараҡ хисаплаҙармы?**

- Хәҙер һеҙ эшһеҙ булараҡ ҡына пособиеға һәм түбәндә килтерелгән түләүҙәргә өмөт итә алаһығыҙ:

- эш биреүсе эшмәкәрлеген ябыу йәғни туҡтатыу менән бәйле эштән сығарылғандар өсөн йөклөлөк һәм бала табыу буйынса айлыҡ пособие - 438,87 һум;

- йөклөлөктөң тәүге осорҙарында (фәҡәт ойошма бөтөрөлөү менән бәйле эштән сыҡҡандар һәм көндөҙгө бүлек студенттары өсөн) бер тапҡыр түләнә торған пособие - 438,87 һум;

- бала тыуғандан һуң бер тапҡыр түләнеүсе пособие 11 703, 13 һум;

- йәш ярымға тиклем баланы ҡараған өсөн ай һайын түләнеүсе айлыҡ минималь пособие: тәүге баланы ҡараған өсөн - 2194,34 һум, икенсе һәм унан һуңғы балаларҙы ҡараған өсөн 4388,67 һум.

## ҮҘЕҢ ИҪӘПЛӘТ

**Сабыйым менән декрет отпускыһында ултырам, икенсе балабыҙҙы көтәбеҙ. Пособие тулы күләмдә иҫәпләнһен өсөн миңә бер көнгә генә булһа ла эшкә сығырға кәрәкме икән?**

- Эшкә сығып тормаһағыҙ ҙа була - был бер нәмәгә лә йоғонто яһамаясаҡ. Шуны ғына иҫтә тотоғоҙ: 2011 йылда һеҙ үҙегеҙҙең уртаса эш хаҡын, һеҙгә түләнәсәк пособиеның ниндәй осраҡта күберәк килеп сығыуын күҙҙә тотоп, яңы йәки иҫке ҡағиҙәләр буйынса иҫәпләүҙе һайлай алаһығыҙ. Әгәр һеҙҙең страховкаланған стажығыҙ 6 айҙан күберәк булһа, пособие түбәндәгесә иҫәпләнә: бынан алда декретта булыуығыҙ сәбәпле, яңы декрет алдынан эшләмәүегеҙҙе иҫәпкә алып, тәүге декрет алдынан ошо уҡ эш биреүселә эшләгән саҡтағы һуңғы 12 календарь айҙағы уртаса эш хаҡынан сығып иҫәпләнә.

2011 йылдан пособие иҫәпләүҙең яңы ҡағиҙәләре ғәмәлгә инде. Хәҙер пособие күләме башҡа эш биреүселәрҙә эшләгәнде лә иҫәпкә алып, декретҡа тиклемге ике календарь йылдың уртаса эш хаҡынан сығып иҫәпләнә. Ошо ике йылдың береһендә һеҙ йөклөлөк йәки бала табыу буйынса отпускыла йәки бала ҡарау буйынса отпускыла булған хәлдә, уртаса эш хаҡын иҫәпләү маҡсатында тейешле календарь йыл һеҙҙең ғариза буйынса пособие күләмен арттырыу шарты менән алдағы йылдарҙың эш хаҡына алмаштырыла ала.

## ҺӘР САБЫЙ - ҮҘ РИЗЫҒЫ МЕНӘН

**Игеҙ балалар тыуған хәлдә декрет аҡсаһы һәм бала ҡараған өсөн пособие икеләтә күләмдә иҫәпләнәме?**

- Әгәр игеҙ балаларығыҙ донъяға килһә, һеҙгә бала тапҡанға тиклем һәм унан һуңғы осорға бер бала өсөн тейешле 70 көнгә түгел, ә бала тыуғанға тиклем 84 һәм бала тыуғандан һуң 110 календарь көнгә пособие иҫәпләнә. Йәш ярымға тиклемге бала (әгәр игеҙәктәр тәүге балаларығыҙ булһа) ҡараған өсөн айлыҡ минималь пособие 6583,01 һум (2194,34+4388,67) тәшкил итәсәк, сөнки игеҙәктәрҙең береһе - тәүге, һыңары икенсе бала тип ҡараласаҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Күҙгә арпа сыҡһа

Таҙартылған һарымһаҡ бүлеме менән 2-3 көн арпалы күҙ ҡабағын ышҡырға.

### Аяҡ тирләһә

Аяҡ тирләһә, насар еҫ тә сыға, уңайһыҙ. Бынан ҡотолоу өсөн ике пакет яп-ябай сәйҙе 1 литр һыуға һалып, аяҡтарҙы тығып ултырырға ғына кәрәк.

### Ҡан баҫымы юғары булһа

Ҡан баҫымы күтәрелгәндә бер ай буйы бер балғалаҡ шәкәр ҡомона 5 тамсы аҡ шыршы майы тамыҙып, ирегәнсе һурырға һәм йоторға, аҙағынан һыу эсмәҫкә. Көнөнә бер генә ҡулланырға дауаны.

### Ҡолаҡтар ауыртһа

Йәй күберәк бала-сағаның ҡолағы ауырта, һыуҙа йөҙәләр, кейенмәй йөрөйҙәр һ.б. Унан ҡотолоу өсөн :

❖ Ҡолаҡтарға ҡоро йылы компресс ҡуйырға.

❖ Бик ныҡ ауыртһа, аҙ ғына йылытып, 1 тамсы араҡы тамыҙырға йәки 70 процентлы спиртта сылатылған мамыҡ киҫәген тығырға.

### Нервыларыңды тынысландыр

❖ Ус төбөндә әстрхан сәтләүеген, йәки ҡәләмде әйләндер. Ҡулдарҙың хәрәкәтләнеүе психиканы тынысландыра, мейенең арығанлығын кәметә. Бармаҡ остарындағы нервы күҙәнәктәре баш мейеһенең тынысландырыусы үҙәктәре менән бәйләнгән.

❖ Шуға күрә күберәк бөтә бармаҡтарығыҙ менән дә тәсбих тартығыҙ: сауаплы ла булырһығыҙ, ял да итерһегеҙ, нервыларығыҙ ҙа тынысланыр.

### Бал ҡорто саҡһа

Йәй бал ҡорто күп оса, сағалар ҙа. Саҡҡан урынға тиҙ генә һуған киҫәген һалығыҙ, ул ағыуҙы сығара. Унан ҡыяр киҫәге менән ҡаплағыҙ - тәндең һыҙлауын һәм шешеүен баҫа. Һеркәгә мансылған сепрәк менән лимон һыуы баҫһаң, сағылған урын ҡыҙармаҫ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы.**




# МИЛЛӘТ ТӘРБИӘЛЕ,
## ҡатындары тәрбиәле булһа

**Тәжрибәле кешеләргә мәғлүм булыуынса, бала биш-алты йәштән уҙғандан һуң һөйләшергә, күҙенә күренгән, аҡылы еткән нәмәләрҙе һорарға, һәр нәмәне тикшерергә тотона.**

Сабый баланың һорауҙары иң мәғлүмәтле ғалимдарҙы ла хайран ҡалдырырлыҡ дәрәжәлә, иң кәрәкле нәмәләр хаҡында булыр. Һәр нәмәне һорашыуҙары, берҙән, яҡынлыҡ тойғоһонан, икенсенән, беҙҙән өйрәнәсәк нәмәләре булыуынандыр. Әгәр асыҡ һәм дөрөҫ яуап биреүсе булһа, сабый булһалар ҙа, мәктәпкә барғанға ҡәҙәр улар бөйөк мәғрифәткә өлгәшергә һәм зиһендәренә ғилем орлоҡтары сәсергә яраҡлы булырҙар.

Һулаған һауабыҙ, эскән һыуыбыҙҙың файҙаһын, ашаған икмәгебеҙ, кейгән кейемебеҙҙең ниндәй ғәмәлдәр нәтижәһендә барлыҡҡа килеүен, яуған ҡар, ямғырҙың, ҡырау, ысыҡ, күк күкрәү, йәшен йәшнәүҙең нимәнән барлыҡҡа килеүен; йорт һәм ҡыр хайуандарының файҙаһын һәм зарарын, ҡағыҙҙың нимәнән яһалыуын, китаптарҙың ни рәүешле баҫылып донъяға таралыуын; ай һәм ҡояштың ни ҡәҙәр ҙурлығын һәм ерҙән ни ҡәҙәр йыраҡ тороуын; көн менән кистәрҙең ни рәүештә оҙайып, ҡыҫҡарыуы кеүек хәлдәрҙе балалар үҙ уйындары ваҡытында еңел өйрәнер. Быны менән бергә, ата-әсә инсафлыҡты яратыу, яманлыҡтарға нәфрәт менән ҡарау юлын балаһының зиһененә һалыр, уларға бөйөк шәхестәр, уларҙың нисек дан һәм хөрмәт ҡаҙаныуын, ғәҙел хөкөм итеүселәрҙе, ышанысլы сауҙагәрҙәрҙе, динле һөнәрселәрҙе һөйләр. Ата-әсә балаларын ялҡаулыҡтан биҙҙерәсәк, тырышлыҡты яраттырасаҡ, уларға милләтте һөйөү, күңел сафландырыу хаҡында, ауырыу һәм сәләмәтлек сәбәптәре, мәжлес, әңгәмә әҙәптәре тураһында балалар ятырлыҡ итеп риүәйәт итәр. Ләкин балаһы һорашҡандарҙы үҙе лә белмәгән ата-әсә баланың һорауҙарынан биҙер һәм быны туҡтатыр өсөн ялған яуап табып, уны баланың күңеленә урынлаштырыр. Бала иһә, бындай яңылышлыҡтарҙы зиһенендә һаҡлар, һуңынан тәрбиәне ҡабул итмәҫ. Һөҙөмтәлә, баланың күңеле боҙоҡ һәм яңылыш фекерҙәр менән тулыр.

Ҡайһы бер әсәләр балаларын бәрей, бисура, шүрәле, аждаһа, бүре менән ҡурҡыта, хатта ҡайһы берәүҙәре: "Мулла килә, мәктәпкә алып китер, һабаҡ уҡытыр", "Мулла килә, ҡолағыңды ҡырҡыр" тип нигеҙле һәм нигеҙһеҙ хәбәрҙәр менән ҡоттарын алыр, аҡылға ҡаршы килгән, холоҡто боҙоуға сәбәп булған яңылыш әкиәттәр менән баштарын бутар. Бындай тәрбиә - иң яман тәрбиә булыр. Мулла һәм уҡытыусы менән ҡурҡытыу балаларға ғилемде лә, ғалимдарҙы ла дошман иттереүгә сәбәпсе булыр.

Ҡурҡаҡлыҡ - иң юҡҡа сығара торған бер холоҡтор. Урынлы-урынһыҙ ҡурҡытып тәрбиәләү сәбәпле, баланың ҡаны боҙолор, әүҙемлеге, тырышлығы юғалыр, һәр төрлө ихтималдарға юл бирер һәм хыялдарға эйәрә башлар, ахырында, һис кемгә файҙаһы булмаған бер ҡурҡаҡ булып ҡалыр. Ҡурҡаҡ кеше, милләт һәм ватаны өсөн хеҙмәт итеү түгел, хатта ғаиләһе, хатта үҙе өсөн дә хеҙмәт итә алмаҫ. Балаларҙы урынһыҙ ҡурҡаҡлыҡҡа өйрәтеү бөтә ғаиләне, бәлки милләтте ҡурҡаҡлыҡ һаҙлығына батырып ҡалдырыуға сәбәпсе булыр.

*ТЕЛЕМ, ТЕЛГЕНӘМ...*

# ТЕЛЕБЕҘҘЕҢ МОҢО КИТМӘҺЕН, ТИҺӘК...

## балаларыбыҙға ысын башҡорт теле мөхите булдырайыҡ

**Ғалим Вәкил Хажиндың "Туған тел дәресенең бәҫен теория уҡытыу түбән төшөрә" тигән фекерен тулыһынса тип әйтерлек хуплайым. Ысынлап та, туған телебеҙҙе һаҡлау, уны уҡытыуҙың бөгөнгө яҙмышы һис кенә лә ҡыуанырлыҡ түгел.**



Тел һуты кипһә, байлығы һайыҡһа, уның кәрәге лә ҡалмаясаҡ. Тел яҙмышы - милләт яҙмышы, ул хаҡта күп яҙабыҙ, күп һөйләйбеҙ. Әммә телде һаҡлау юлдары төрлө һәм күп. Дөрөҫ, атай-олатайҙар телде, нигеҙҙә, һөйләшеү, үҙ-ара аралашыу, ижад аша һаҡлап килгән. Бай телен генә түгел, башҡа бик күп фән тармаҡтарын да бөгөнгәсә еткергән боронғолар. Биологияны ла, астрономияны ла, химияны ла, тарихты ла, геологияны ла һәм башҡаларҙы ла белгән улар. Һаман сере асылып бөтмәгән булат ҡылысын да ҡойған, дары ла яһаған, нефть ятҡылыҡтары ла табып эшкәртеп ҡараған, металдың дауалау серҙәрен дә белгән, бөтөн шифалы үҫемлектәрҙе лә файҙаланған, ғәжәп шифалы ризыҡ етештергән. Әммә был белемдәрҙең береһе лә фән кимәленә, фән юғарылығына күтәрелмәгән, сөнки уларҙың нигеҙе - теорияһы эшләнмәгән, йәғни тормош тәжрибәһе дөйөмләштерелеп, тәбиғәт ҡанундарынан сығып ҡалыпҡа һалынмаған. Әйтәйек, ҡытайҙар үҙҙәренең "ҡот" - **"ци"** төшөнсәһен киңәйтеп, нигеҙләп, иҫбатлап фән кимәленә күтәргән һәм **фэн-шуй** тип атап, донъяға тараткан. Ә беҙҙең иҫ киткәле **ҡот** тигән төшөнсәбеҙ ҙә, ғәжәп **шифалы ризыҡтарыбыҙ ҙа, йылҡысылыҡ серҙәре лә** тикшерелмәй һәм онотола бара. Оло үкенес менән ҡабатлап үтергә кәрәк: меңәр йылдар буйы үҙ көнкүрешен үҙе бар иткән, үҙ кәрәк-ярағын үҙ ғилеме нигеҙендә булдырған башҡорт халҡының ғилеме бөгөнгәсә фән кимәленә күтәрелмәгән, бары "Туған тел" һәм "Башҡорт тарихы" тигән фәндәребеҙ генә бар. Телебеҙҙе фән кимәленә күтәреүсе бит ул теория - грамматик ҡағиҙәләр. Унан да мәхрүм ҡалыу оло хилафлыҡ булыр.

Был мәсьәләгә икенсе юҫыҡтан ҡарарға кәрәктер. "Башҡорт теле" тигән фәндәге ҡағиҙәләрҙең нисек һәм ниндәй ҡалыпҡа һалыныуы, ниндәй ҡатмарлылыҡта өйрәнелеүе юҫығынан. Башҡорт теле грамматикаһы телебеҙҙең үҙ ҡанундарынан сығып эшләнгәнме, әллә бөтөнләй икенсе төргә ҡараған тел грамматикаһына яраҡлаштырып, телебеҙгә хас булмаған ҡалыпҡа һалып маташабыҙмы? Камилмы, дөрөҫмө башҡорт теле грамматикаһы? Ни өсөн ауыр үҙләштерелә? **Ни өсөн балалар үҙ туған телен, рәхәтләнеп йырлап ултырып өйрәнерлек матур телебеҙ дәрестәрен иң ауыр дәрестәр иҫәбенә индерә? Яуап бер: башҡорт теленең үҙ грамматикаһы эшләнмәгән. Ул рус теленең туранан-тура күсермәһе.** Ә бит, билдәле булыуынса, рус теле бөтөнләй икенсе төр телдәргә - фузион /латинса, металл иретәм/ телдәр төрөнә ҡарай. Рус телендә бөтөн үҙгәрештәр һүҙҙең тамырында, нигеҙендә бара. Хатта фәҡәт баҫым арҡаһында ғына ла һүҙ мәғәнәһе бөтөнләй үҙгәргән осраҡтар байтаҡ. Мәҫәлән, мука - яфа, ыҙа, мука - он һәм башҡалар. Шунлыҡтан рус грамматикаһы бөтөнләй икенсе ҡалып менән төҙөлгән. Тел ғилеменә тәрән төшөп китеү маҡсатым түгел, ә үҙ грамматикабыҙҙың булмауы арҡаһында уның ауыр фәндәр исемлегендә булыуының сәбәбен байҡау һәм һөҙөмтәлә тел байлығының һайыға һәм яңылыша барыуы хаҡында үҙ ҡарашымды әйтеү. Мәҫәлән, ҡалала тел мөхитендә үҫмәгән башҡорт балалары: "Минең китап", "минеке әсәй" йәки "китапты бир" /уныҡымы ул, түгелме - барыбер/, "сәйҙе яһа" тип һөйләшә.

Грамматик ҡағиҙәләрҙе ысын башҡортса итеп эшләү -милләттең бөгөнгөһө, киләсәге өсөн янып-көйөп кенә түгел, ә уны һаҡлау юлдарын да эҙләгән, борсолған, үҙ өйөндә үҙ балаларын, ейәндәрен үҙ ҡағиҙәләре нигеҙендә туған телгә өйрәтеү тәжрибәһен татыған ғалимдарҙың эше. Шул саҡта грамматикабыҙ аңлайышлы ла, еңел дә, йырлап уҡымалы ла булыр. Ә беҙ, телебеҙҙең, илебеҙҙең, милләтебеҙҙең киләсәге өсөн битараф булмаусылар, яңы грамматика эшләнгәнен көтмәйек (заман да, сәйәси үҙгәрештәр ҙә көтмәй), балаларыбыҙға әле үк ысын башҡорт теле мөхите булдырайыҡ.

Мәҫәлән, иң ябай **беренсе ысул:** саф башҡортса һөйләшеү, бер-береҥ менән фәҡәт туған телдә аралашыу. Юғиһә, ошоға оҡшаш аралашыу өҫтөнлөк ала ҡала башҡорттарында. Өләсәй үҙ ейәненә: "Балам, һин ҡайтып еткәс тә звонить ит, пожалуйста, мин бит бик беспокоиться итәм. Или үҙең итмәһәң, мамыңа или папыңа әйт, пускай улар звонить итһен, может бөгөн үк, лучше воскресеньела", - тип һөйләшеү - тел мөхите тыуҙырыу түгел, әлбиттә. Ололарыбыҙҙың ошондай һөйләшеүенең һөҙөмтәһе лә инде Радик Юлъяҡшиндың "Мин һине хочу" тигән йыры. Теҙеп яҙа китһәң, йәштәрҙең йыр һүҙҙәре сәсең үрә торорлоҡ. Тик улар ғәйеплеме? Беҙгә, атай-әсәйҙәргә лә, олатай-өләсәйҙәргә лә, уҡытыусыларға ла, ғалимдарға ла, яҙыусыларға ла, театр әһелдәренә лә, ҡыҫҡаһы, телебеҙ, ауыҙ тултырыбыраҡ әйткәндә, милләтебеҙ киләсәгенә ҡарата битараф булмаған бөтөнөһөнә лә сикә ыуалап уйланып-баш ватып ултырырға түгел, хәл итергә кәрәк. Үҙ өйөңдән, үҙ ғаиләңдән, үҙ балаңдан башларға. Трибунанан түгел.

**Икенсе ысул.** Иң элек, әлбиттә, көн һайын иртәнән кискә тиклем ҡолаҡ төбөндә яңғырап торған, бар башҡорттар ҙа ихлас тыңлаған һәм ҡараған радио һәм телевидение телен таҙартыуҙан башларға. Башҡортса таҙа һөйләшеүсе дикторҙарыбыҙҙың да теле камиллашыуға мохтаж. Бай, һутлы, яғымлы, моңло бит телебеҙ, заманында башҡорт телен тикшереүсе, "Башҡорттар өсөн әлифба" төҙөүсе ғалим Александр Бессонов "Башҡорт теле - яғымлы, ҡолаҡҡа ятышлы, бай, һығылмалы тел" тип баһалаған (бөгөнгө аралашыу телен ишетһә, нисек баһалар ине икән). Көйгә һалынып, йырлап торған тел ишетке килә көн һайын. Тапшырыу алып барыусыларға, телде байытыу йәһәтенән, мәҡәл-әйтемдәр ҡушып һөйләү, сағыштырыуҙар файҙаланыу, синонимдар, омонимдар байлығын иҫтә тотоу, халыҡ ижады өлгөләренән миҫалдар килтереү мотлаҡ *(Алып барыусылар араһында төрлөләре бар, әлбиттә, ләкин тапшырыуҙарға тотош байҡау яһауҙы маҡсат итеп ҡуймағанлыҡтан, айырым исем-шәрифтәргә туҡталып тормайынса, дөйөм эфир теле тураһында ғына һүҙ алып бармаҡсымын).* Ә беҙ ни ишетәбеҙ? Саманан ашҡан ярлы тел генә түгел, баҫымды дөрөҫ ҡуймау, рус теленән туранан-тура, һүҙмә-һүҙ тәржемә итеү ҡолаҡты яра. Ҡоро һүҙ - ҡуңалтаҡ итек, тигән мәҡәлде иҫтә тотоп, миҫалдар килтереп үтәйем.

**Баҫым.** Башҡорт теле рус теленән айырмалы рәүештә ялғауҙар ҡушылыу юлы менән үҙгәрә. Агглютинатив *(латинса, йәбештереү тигән һүҙ)* төргә, ә рус теле, әйтеп үтелде, фузион төргә ҡарай. Шуның өсөн дә рус телендә баҫым әле бер өнгә, әле икенсеһенә төшә, ә башҡорт телендә баҫым һуңғы ижеккә төшә. Ялғау йәбештереү ысулы менән һүҙ үҙгәрә һәм баҫым

да артҡа күсә бара, сөнки һүҙ ни тиклем оҙон булмаһын, әйтеләһе фекерҙең төп мәғәнәһе иң һуңғы ижектә була. Баҫымды дөрөҫ ҡуймаһыңмы - әйтәһе фекерҙең әрәсәһе үҙгәрә. Мәҫәлән, **шыйыгайтылмағанғалыр, электрләштерелмәгәнлектәндер.** Был һүҙҙәр эсендә исем дә, сифат та, рәүеш тә, ҡылым да бар. Ә төп мәғәнәне аңлатыусы ялғау - *-лыр, -дер.* Был ялғауҙар "Ни өсөн? Ни сәбәпле?" тигән һорауға яуап бирә. Ошо һүҙ үҙгәрешен рус теле грамматикаһы ҡағиҙәһе менән аңлатып ҡара. Аңлатып булмай, шуның өсөн йәштәр уны файҙаланмай ҙа. Еңелерәк әйтелгән ҡылым формалары ла бик һирәк ҡулланыла. Ә бит башҡорт телендә әйтәһе фекер ҙә, күңел торошо ла ҡылым формаларында ныҡ сағыла. Мәҫәлән, ал - бери, алғыла - бери постоянно, по надобности, алғылаштыр - бери периодически, алыңҡыра - бери еще.

Башҡорттарҙа үтенестең, һорауҙың, теләктең айырым һүҙҙәре булмаған. Ул аҙаҡ, ғәрәп, фарсы теле аша килеп ингән. Инһен, ҡулланайыҡ, өйрәнелгән. Әммә әйтәһе фекер - икенсе. "Зинһар", "ғәфү итегеҙ", "кисерегеҙ", "рәхим итегеҙ" тигән һүҙҙәрҙең булмауы арҡаһында башҡорттарҙа "әйтегеҙсе", "ҡарасы", "барһаңсы", "әйт инде", "ҡана, күрһәт әле", "ҡараһана", тигән өлгө бар. Һүҙҙәрҙең ошо рәүешле ҡулланылыуы телдең генә түгел, холоҡ-ғәҙәттең дә йомшаҡлығына килтергән. Шуға башҡорттарҙы йомшаҡ тәбиғәтле тигәндәр. Ә хәҙер, миҫал өсөн, радио һәм телевидение дикторҙары теленең көн һайын, сәғәт һайын ҡабатланған үтенестәрен телгә алайыҡ. **Тыңлағыҙ, шылтыратығыҙ, әйтегеҙ әле, уйлағыҙ** һәм башҡалар. Ошондай үтенестәр һүҙҙең тәүге ижегенә баҫым яһап әйтелә. Шунлыҡтан, был һүҙҙәр үтенес, һорау, мөрәжәғәт кеүек яңғырамай, ә фарман, бойороҡ төҫө ала. Әйтеп үтелде, был милли холоҡ үҙенсәлеген дә юғалта. Ә әҫәр уҡығанда иһә, баҫымдың дөрөҫ ҡуйылмауы уның йөкмәткеһенә, мәғәнәһенә, фекерҙең әрәсәһенә хилаф килтерә. Быны беҙ "Урал батыр" эпосы конкурстарында асыҡ күрәбеҙ. Мәҫәлән, Йәнбирҙе ҡарттың балаларын тыйыу һүҙҙәрен:

*Мин ни бирһәм, ашағыҙ,*
*Мин ҡушҡанды эшләгеҙ,*
*Күнегергә һыбайға -*
*Ана, болан менегеҙ,*
*Сыйырсыҡтың тубына*
*Яғылбайҙы сөйөгөҙ*
*Һыуһаһағыҙ уйында,*
*Ана, аҡ һыу эсегеҙ,*
*Ҡабырсаҡҡа тултырған*
*Ҡандан ауыҙ тартығыҙ.*

- тигән юлдарҙағы ҡылымдарҙың барыһына ла баҫымды тәүге ижеккә ҡуйып һөйләйҙәр. Һөҙөмтәлә телдең моңо боҙолоу ғына түгел, тыйыу урынына әрләү-екереү килеп сыға. Эпосты яттан һөйләүсе уҡыусылар, ысынлап та, йөҙҙәренә асыу билдәләре сығарып, ҡулдарын киҫкен һелтәп, "уландарына" асыулы ҡараш ташлап уҡыйҙар. Уҡыусылар ижекте һүҙҙең беренсе ижегенә ҡуйып уҡыуҙы ҡайҙан өйрәнә? Әлбиттә, радио һәм телевидение өлгөһө был. Тимәк, тел таҙалығы һүҙҙәргә генә ҡайтып ҡалмай, ә һөйләү рәүеше, баҫым ҡуйыу ҙа ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә.

Ә тел таҙалығына килгәндә иһә, рус теленән туранан-тура тәржемә итеп һөйләү ҡолаҡты яра. Эфир тулҡындары аша килеп еткән туған телем сафлығын ҡурсалау маҡсатында конкурс иғлан итеү фекере лә уянып ҡуя. Ул конкурстың шарты бик ябай: **"Түңәрәк өҫтәлдең артын күрһәткән"** йәки **"фатир сисә"** алған журналист йәки тура эфирҙа тапшырыуҙар алып барыусыны еңеүсе тип иғлан итәсәкбеҙ һәм мин уға шәхси премия тапшырасаҡмын. Сөнки **түңәрәк өҫтәл артында** һөйләшеүҙәр йыш үткәрелә. Ә мин ошо хәлде күҙ алдына килтерә алмайым. Йәки: "Хәҙер үҙебеҙҙә бына тигән магазин асылды, яҡшы мебель артынан алыҫ йөрөргә түгел", тигән иғланды ишеткәс, ҡала урамдары буйлап йәһәтләп китеп барыусы мебелде һәм артынан йүгерә-атлай эйәртеп барыусы һатып алыусыларҙы һис кенә лә күҙ алдына килтереп булмай.

Һүҙҙәрҙең ялғауҙарын дөрөҫ әйтмәү һәм хаталы яҙыу осраҡтары йышайғандан-йышая бара. Һүҙҙәргә баҫымды дөрөҫ ҡуйыу бик мөһим мәсьәлә. Беҙ үҙ телебеҙҙең әйтелешенә ҡарата шул тиклем битарафбыҙ, төҙәтеү-төҙәттереү йәһәтенән ҡыл да ҡыбырлатмайбыҙ. Мәҫәлән, үҙенсәлекле моңло тауышлы йырсыбыҙ Искәндәр Ғәзизовтың йырын йәштәр ҙә, үҫмерҙәр ҙә тиҙ отоп алып ҡабатлай. Яңыраҡ район мәктәптәренең береһендә мәктәп уҡыусыларының концертын ҡарарға тура килде. Бер уҡыусы: "Һинең менән **шундый** рәхәт миңә", - тип, тап Искәндәрсә йырлап ебәрҙе.

Башҡорт теленең моңо иҫ китмәле, шуның өсөн дә өндәребеҙ бихисап. Байтаҡ матур өндәребеҙҙе юғалтып бөтөп барабыҙ. Ҡабат ҡайтара алырбыҙмы, юҡмы? Һаман артҡа китәбеҙ. Был йәһәттән хатта өлкәндәрҙең дә теле боҙолоп бара. Әйтәйек, Сибай, таба, әбей, бабай рәүешле һүҙҙәрҙә уртала килгән өн "*б*" өнөнә ҡарағанда "в" өнөнә яҡыныраҡ әйтелә. Бәлки, "*в*" итеп яҙырға ла кәрәк булғандыр? Ул саҡта дөрөҫөрәк әйтелер ине. Хәҙер иһә ҡаты итеп, яңғыратып "*б*" тип әйтәләр. Башҡорт телендә һүҙ башында килгән "в" "*у-ү*"-гә яҡын. Әммә юҡ хәҙер был өндәр телмәрҙә. Латин графикаһы менән яҙған саҡта булған. Мин ошо йомшаҡ моңло өндәрҙең һөйләү теленән төшөп ҡалыуына шул тиклем әсенәм, йәл миңә ул өндәр. Телдең үҙенсәлекле моңо кәмей бара.

Радио һәм телевидение теле тураһында һүҙ башлағас, йырҙар хаҡында ла әйтеп китергә кәрәктер. Радио һәм телевидениела музыка, йыр яҙҙырыу студияһында оҙаҡ йылдар Мельников атлы белгес эшләне. Үҙ эшен һәйбәт белгән иптәш ине ул. Әммә башҡорт телен аңламағанлыҡтан һәм данлыҡлы йырсыларҙың үҙ телдәрен, үҙ йырҙарын яҡшы белеүенә ныҡ ышанғанлыҡтан, үҙ туған телдәрен боҙаларҙыр тип башына ла килтермәгән тауыш режиссеры Мельниковтың йырҙарҙы тел белгесе саҡырмай ғына яҙҙырыуы арҡаһында байтаҡ хаталарға юл ҡуйылған. Бөгөнгө көндә арабыҙҙан киткән, әммә иҫ киткмәле оло баһалауға лайыҡ булған йырсыларыбыҙға, оло рәхмәтебеҙҙе белдереп, уларҙың хаталы һүҙҙәр менән яҙҙырған йырҙарын тапшырмаһаҡ, яҡшы булмаҫмы? Халыҡ яратҡан йырсыларыбыҙҙың да бәҫе төшмәҫ һәм тыңлаусыларҙың да башы буталмаҫ ине. Әйтәйек, тарихи йырыбыҙ "**Тәфтиләү**"гә - "*Ир балалар ҡайта хеҙмәт иткәс, ҡыҙ балалар ҡайтмай бер киткәс*" тигән һүҙҙәр ҡушыу, "**Ғилмияза**"ны "*Тыуған илкәйемә ҡайтыр инем, аяҡтарым талһа,* ***көн битләп***" "**Сывай ҡашҡа**"ны "*Һыбай ҡашҡа*" тип йырлау һәм башҡалар.

Һуңғы ваҡыттарҙа яҙҙырылған йырҙарҙың башҡарыусылары иҫән, уларҙы яңынан яҙҙырыу мөмкин булмаҫмы? Яңынан яҙҙырырға теләмәйҙәр икән - тапшырмаҫҡа кәрәктер. **Ромашкалар, ландыштар** тип йырланған йырҙарҙы (бала был сәскәләрҙең башҡортсаһы шулай икән тип уйлаясаҡ) ураған һайын ҡабатлау кәрәкме, йәки мәҡәл урынына әйтелгән һүҙҙәре булған йыр: "*Алһыу, алһыу, бигерәк алһыу кәрешкәнең сәскәһе, бер кемдән дә һорап килмәй бәндәнең* ***күрәсәге"*** тигән урынға "*бер кемдән дә һорап килмәй бәндәнең* ***киләсәге***" тип үҙгәртелгән, "Һандуғастар ҡапҡала, ҡанаттары таҡтала" тигән туҙға яҙмаған һүҙҙәр менән йырланған йырҙы (ҡапҡала ҡанаттарын һәлендереп ултырған һандуғасты бер тапҡыр ҙа күргәнем юҡ) тапшырыу кәрәкме? Ә инде яратҡан һәм яңы яҙмаларын һәр саҡ көтөп алған моңло тауышлы йырсыбыҙҙың "Зөлхизә"нең һүҙҙәрен боҙоп башҡарыуы күңелде төшөрҙө лә ҡуйҙы.

Ялан ғына ерҙән дә болан килә /**лә**/,

Уйһыу ҙа ғына ерҙән дә, ай, түтә тип.

Был урында "*лә*" теркәүесен өҫтәп ебәреү ни өсөн кәрәк һуң? Ғәҙәттә, *лә* теркәүесе *һәм* урынында файҙаланыла. Халыҡ үҙ ижадында бер генә өнөн дә яңылыш ҡулланмаған. Һәр өнө үҙ урынында һәм бер мәғәнә аңлата. Грамматик күҙлектән ҡарағанда, ҡатнаш ҡушма һөйләм был. Теҙмә ҡушма һөйләм булған осраҡта ғына *лә* теркәүесен өҫтәп ебәреү тупаҫ хата булмаҫ ине.

Бына шулай итеп, көндөгөнөкө көнгә, көнө төнгә ялғанып айҙар, йылдар үтә. Бөгөнгә ярамаймы, нисек һөйләшһәң дә барыбер түгелме - бер-беребеҙҙе аңлайбыҙ бит, бында тамаҡ ҡайғыһы йонсота, тел ҡайғыһы төштән һуң, таҙа тел яҙыусыларға ғына кәрәк, хәҙер глобализация, милләт төшөнсәһе барыбер бөтә, тигән ҡолаҡҡа яҡмаған һылтаныуҙар, аҡланыуҙар менән йәшәһәк, бай тарихыбыҙҙы, иҫ китмәле моңобоҙҙо, өйрәнелеп бөтмәгән ғилемебеҙҙе, һоҡланғыс йола-ғәҙәттәребеҙҙе яттарға ҡалдырып, милләт булараҡ ер йөҙөнән мәңгелеккә юғалыуыбыҙ, ә тырым-тырағай вәкилдәребеҙҙең башҡалар үҙ мәҙәниәтен, телен, сәнғәтен үҫтерһен, тарихын өйрәнһен, үҙ телендә аралашһын, китап уҡыһын, театр ҡараһын, йырлап күңел асһын өсөн матди байлыҡ етештереүсе генә булып ҡалыуы бик тә ихтимал. Үҙ телдәренә битараф күп кенә милләттәр ер йөҙөнән юҡҡа сыҡҡан, быныһы тарихтан билдәле.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ИШ ЯНЫНА ҠУШ...

## йәки пенсияма өҫтәмә



**Миәкә яҡтарында тыуып-үҫеп, шунда ғүмер кисерһәм дә, ҡартайған көндә Өфөгә күсеп килергә тура килде. Ғүмер буйы ауыл ерендә йәшәгән кешегә тәүҙә ҡалала йәшәү яза һымаҡ булып күренде, сөнки ауылда тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫ эш менән мәшғүл булып, көндөң дә үткәне һиҙелмәй ҡала. Ә ҡалала иртән иртүк тороп улай-былай итһәң, көндәлек эшең тамамланды, тигән һүҙ. Ишек алдында ла күңел биреп һөйләшерлек кеше юҡ.**

Шулай ары һуғылып, бире һуғылып йөрөй торғас, күңелемә лә яҡтан, пенсияма ҡушымта булырлыҡ килем дә килтергән шөғөл таптым - кәзә йөнөнән бейәләй-ойоҡтар бәйләй башланым. Эшләһәң - эш ырамлы, балаларға ла, ейәндәргә лә етерлек бәйләп ҡуйҙым.

Бер көндө бейәләй-ойоҡтарымды ҡыҙыҡ өсөн ишек алдында ултырған әбейҙәргә сығарып тәҡдим иттем. Береһе шунда уҡ өс пар алды, унан күреп башҡалары ла ҡыҙыҡты. Шулай итеп, бер көндә байтаҡ ҡына аҡса эшләнем. Эшләгән шөғөлөң килем дә килтерһә, һәйбәт икән, тағы ла ҙур тырышлыҡ менән бәйләмгә тотондом. Ейәнсәрем үҙенең уҡыу йортона ла алып барып һатты. Яйлап ҡала баҙарҙарына ла, ял көндәрендә булған йәрминкәләргә лә сыға башланым. Ойоҡбейәләйҙәрҙе 200, бирсәткәләрҙе 250 һум менән һатам һәм һатыуға сыҡҡан көндө, кәмендә, 1000 һум эшләп ҡайтам. Ваҡ-төйәккә бик ярап ҡала был аҡса. Балаларының йылы йөрөүен, үҙҙәренең дә һаулығын ҡайғыртҡандарҙың дебеттән башҡа әйберҙәргә лә заказдар биреп бәйләтеүен иҫәпкә алғанда, эштәрем көйлө генә бара. Бына шулай, иш янына ҡуш тигәндәй, пенсияма аҙ булһа ла өҫтәмә аҡса килеп тора. Үҙемде хәтәр бай кеше һымаҡ хис итәм хатта.

**Менәүәрә СӘЛИХОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

# УНЫҢ ХЕҘМӘТЕ...

## һәр саҡ кәрәк

**Бөгөн өҫтәмә килем алыу мәсьәләһе һәр кем алдында киҫкен тора, тип әйтергә була. Кемдер был мәсьәләне хәл итеү өсөн бар тырышлығын һала, ә кемдер иһә хәлде яҡшы аңлаһа ла, ҡул ҡаушырып, "алма беш - ауыҙыма төш" принцибын алға ҡуйып йәшәй бирә.**

Баш ҡалала йәшәүсе дуҫым Эдик Моратовты нәҡ беренсе төркөмгә индерәм, сөнки ул ғаиләһен матур һәм етеш тормошта йәшәтеү өсөн барыһын да эшләй. Мәҫәлән, ғаилә бюджетына өҫтәмә килем килтереүсе эштәренең береһен генә атайыҡ: ул төп эшенән буш ваҡытта, ял һәм байрам көндәрендә үҙенең йөк машинаһында әйбер ташый, ә ҡайһы саҡта машинаһын ҡуртымға бирә. Тормош булғас, төрлө хәлдәр була - кемгәлер яңы фатирға күсергә, икенсеһенә мебель алып ҡайтырға, өсөнсөһөнә башҡа төрлө хеҙмәттәр өсөн йөк машинаһы кәрәк булып ҡына тора. Ошондай ваҡытта беҙ гел генә Эдикка шылтыратып, уның хеҙмәте менән файҙаланабыҙ һәм, үҙ сиратыбыҙҙа, таныш-дуҫтарға уны рекламалайбыҙ, ә белеүебеҙсә, ниндәйҙер хеҙмәт хаҡындағы иң шәп һәм тиҙ реклама - ул ауыҙҙан ауыҙға күскән хәбәр. Уның башҡарған эшенә ҙур яуаплылыҡ менән ҡарауы, сифатлы итеп үтәүе, шулай уҡ хаҡты ла әллә ни ҡайырмауы клиенттарының һәр ваҡыт күп булыуын тәьмин итә һәм дуҫымдың ғаиләһенә өҫтәмә килем килтерә.

**Азамат ЯҠУПОВ.**
**Өфө ҡалаһы.**

*✓ Мәҙрәсәләргә, мәсеттәргә барһаң, нисә тапҡыр хажға барыуҙары менән маҡтана өлкәндәр. Унда бер тапҡыр барыу, эйе, фарыз, әммә ҡабат барырлыҡ аҡсаң бар икән, уны берәйһен дини уҡыуға йәлеп итеү өсөн тотон.*



**Һәр киң мәғлүмәт сараһы, әгәр уның үҙ аудиторияһы, уҡыусылары булмаһа, үҙ йөҙөн тапмаҫ, үҙ тәғәйенләнешен юғалтыр ине. Тап шул тоғро дуҫтарыбыҙ, әүҙем авторҙарыбыҙ, аҡыллы кәңәшселәребеҙ булғаны өсөн дә беҙ, матбуғат сараларын донъяға бар итеүселәр, үҙ тауышыбыҙҙы ишеттерә, кемдеңдер күңеленә үтеп инә, уйландыра, һыҙландыра, ҡыуандыра алабыҙ. Ошо көндәрҙә редакцияға килеп ингән Фәүзиә апай Йәнтилина, милләтем, тип тә, башҡорт матбуғаты, тип тә йән атып йөрөүсе әүҙем авторҙарыбыҙҙың береһе. Кәрәк саҡта кәңәштәрен дә әйтә, кәрәк саҡта етешһеҙлектәрҙе лә еткерә ул. Был юлы ла һүҙ артынан һүҙ сығып, тормошобоҙҙағы борсолдорған мәсьәләләр тураһында һөйләшеп алдыҡ һәм апайҙың фекерҙәрен уҡыусыларыбыҙға ла тәҡдим итмәксебеҙ.**

## Мәңгелек йөҙ

Хәҙерге ваҡытта тормошта ла, ауылда ла иң борсоғаны - эскелек. Кеше шул арҡала үҙенең Аллаһы Тәғәлә тарафынан тәғәйенләнгән бурысын, кешелек йөҙөн юғалта. Бер ваҡыт үҙ алдыма "кешелеклелек" нимәне аңлата икән, тип уйлап ултырам. Теgeләй уйланым, былай уйланым, аңлатма һүҙлек юҡ. Шунан ҡапыл руссаһын ҡарарға булдым. "Человечность" һүҙе "чело" - йөҙ, "вечность" - мәңгелек тигәндән алынған. Тимәк, Аллаһы Тәғәлә беҙҙең йөҙөбөҙҙө мәңгелек итеп яралтҡан. Ә беҙ эскелек һымаҡ алама ғәҙәттәр арҡаһында кешелек йөҙөбөҙҙө юғалтабыҙ, ваҡытлыса рәхәтлеккә бирелеп, мәңгелек алдындағы бурысыбыҙҙы уйламайбыҙ. Элекке кешеләр Аллаһы Тәғәлә алдында үҙенең ысын йөҙөн һаҡлаған, алдашмаған, урлашмаған, хәйләләмәгән. Ул замандарҙа ауылдарҙа бер кем ишек бикләп йөрөмәне. Йоҙаҡламай ҙа инек. Кешеләр, ишек асыҡ булып та, өйҙә хужалар булмаһа, тупһа аша атламайҙар ҙа ине. Хәҙер ҡайҙан нимәне алып китергә тип ҡарап ҡына торалар. Быларҙың барыһы ла дин юлынан тайпылып, иманды юғалтыу һөҙөмтәһе. Шуға күрә халыҡҡа тиҙерәк дин юлына баҫып, иманды юлдаш итеп, мәңгелек алдында кешелек йөҙөбөҙҙө һаҡлауҙы хәстәрләп, балаларыбыҙға ла шуны аңлатырға кәрәк.

Хәҙер айыҡ тормош өсөн көрәшселәр барлыҡҡа килде. Ләкин шуныһы: был көрәште ололар түгел, йәштәр башланы. Йәштәр айыҡлыҡҡа аңлы рәүештә килә. Бер яҡтан, шатлыҡлы был, икенсе яҡтан, ололар өсөн оят. Өлкән быуын һаман булһа совет осорондағыса йәшәй, уйламай, фекерләмәй, улар өсөн кемдер уйлар әле, тигән ҡылығын ташламай. Совет осоронда бит беҙҙең өсөн уйланылар, беҙҙең өсөн хәл иттеләр, шулай итеп, кешенең мейеһендәге фекерләү зонаһын бөтөнләйгә һүндереп ҡуйҙылар. Әммә динһеҙ, иманһыҙ ҡоролош һәр ваҡыт тарҡала. Баштан уҡ диндән, имандан яҙылмаған булһа, бәлки, был ҡоролошҡа ҡаршы сығырҙар һәм милләт үҙенең эске резервтарын, милли асылын юғалтмаҫ ине. Милли асылды юғалтыр өсөн бөтөнөбөҙҙө бер тараҡ менән тарап, беҙҙән бер - совет милләте әүәләп, беҙҙе юҡ итеү өсөн ҡолдар, зомби әүәләнеләр. Дин юғалтыу - аң юғалтыу ул. Ҡабат үҙ аңыбыҙға ҡайтабыҙ, тиһәк, бөгөн беҙгә кешенең фекерләү ҡеүәһен күтәреү, уны уйларға өйрәтеү зарур. Бының өсөн, тәү сиратта, уҡырға кәрәк. Әлбиттә, уҡыуҙың да төрлөһө була, был осраҡта мин дин юлына баҫып, Ҡөрьән-Кәримде, хәҙистәрҙе уҡыуҙы күҙ уңында тотам. Беҙгә ғилемле булырға кәрәк. Ғилем фекерләүгә нигеҙләнә. Аллаһы Тәғәләнән килгән мәғлүмәтте алып, шул турала фекерләп, уйлап, һығымталар яһау - ул ғилем. Иғтибар итегеҙ: ниндәйҙер бер мәлдә башҡа кинәт кенә матур уй килеп төшә. Ысынлап та, Аллаһы Тәғәлә һиңә бер тамсы ғына фекер бирә лә, артабан уйла, мин һиңә уйларға баш биргәнмен, ти. Ойотҡо һала, уйла, уҡы, эҙлән, тырыш, яуабын табырһың, ти. Аңлы кеше уҡый, яуабын табырға теләй. Ҡөрьән-Кәримдә бөтөн хәл-ваҡиғаларға яуаптар бар, улар аяттар менән нығытылып ҡуйылған.

Кем тәрбиәләгән, тип аптыраған булабыҙ инде. Бер ата-әсә лә балаһының насар тәртибендә үҙе ғәйепле икәнен танырға теләмәй. Иманһыҙлыҡ, динһеҙлек- бөтөн булған бәләләрҙең башы. Динһеҙлек хаяһыҙлыҡҡа килтерә. Дин - ул тәрбиә, Аллаһы Тәғәләгә юл. Динһеҙҙәрҙең маҡсаты - билдән түбән ғәмәл, нәфсе. Нәфсе шул тиклем ҡурҡыныс нәмә. Хәҙерге ваҡытта күптәр нәфсе ҡоло булып йәшәй, нәфсе көнләшеүгә, бер-берең менән ярышыуға, бер-беренддән арттырырға тырышыуға килтерә. Күптәр нәфсеһе арҡаһында аҡса ҡолона әйләнә. Әлбиттә, аҡсаһыҙ йәшәп булмай, әммә хәләл көсөң менән тапҡан мал, ризыҡтан да татлыһы юҡ. Дин юлында йөрөгән кеше үҙенең самаһын белә. Ҡайҙа хәрәм, ул яҡҡа үтмәй, ҡайҙа хәләл - шунда бара. Хәрәм менән хәләлде динһеҙ кеше аңламай, шуның өсөн саманы ла белмәй.

# КЕШЕЛЕК ЙӨҘӨНДӨ ЮҒАЛТМА,

## ул Хоҙай Тәғәлә бүләге…



### Хеҙмәт тәрбиәһе

Былтыр ҡоролоҡта күпме генә һыу һипһәң дә бер нәмә лә үҫмәне. Хоҙай Тәғәләнең ҡөҙрәте, уның энергияһы менән төшкән ямғыр ғына шул тиклем шифалы икән. Шифалы һыу күктән төшөргә тейеш. Үҫкән үләне лә, һыуы ла - Аллаһы Тәғәләнең ниғмәте. Беҙ шуға шөкөр итә, рәхмәт әйтә белмәйбеҙ. Күптәр шуны аңламай. Элегерәк һыу инергә барһаҡ, инәйҙәр, өләсәйҙәр мотлаҡ, һыуҙың янында яраусы итә күрмәгеҙ, тип киҫәтә торғайны. "Һыу изге, уны рәнйетһәң, ул ҡорой. Һәр нәмәнең йәне бар, шуға уларҙан рөхсәт алырға, шунан ғына файҙаланырға кәрәк", тиҙәр ине. Беҙ шундай төшөнсәләр менән үҫтек, әле шундай аҡылды балаларға, ейән-ейәнсәрҙәргә аңлатырлыҡ әбей-бабайҙар юҡ кимәлендә. Әлеге ваҡытта әхлаҡи көрсөктәбеҙ. Мәҙрәсәләргә, мәсеттәргә барһаң, нисә тапҡыр хажға барыуҙары менән маҡтана өлкәндәр. Унда бер тапҡыр барыу, эйе, фарыз, әммә ҡабат барырлыҡ аҡсаң бар икән, уны берәйһен дини уҡыуға йәлеп итеү өсөн тотоноу сауаплыраҡ түгел. Шулай булғас, уларға энергиянды, көсөңдө сарыф иткәнсе, кешесә йәшәргә тырышҡан имен ғаиләләргә ярҙам итергә кәрәк. Улымдың бер иптәше бар. Сәйет исемле ул. Нишләптер, ул бала һәр ваҡыт беҙҙә йөрөнө. Үҙе шул тиклем уҡырға тырышты. Мин уға һәр ваҡыт хәлемдән килгәнсә ярҙам иттем, ашаттым, тәрбиә, өгөт-нәсихәт һүҙҙәрен еткереп торҙом. Улым уны үҙенең эргәһенә эшкә алды. Шул бала матур итеп машина ремонтларға, аҡҡса эшләргә өйрәнде. Аҙаҡтан ул, рәхмәт яуғыры, киләсәккә ышаныс менән ҡарарға мөмкин икәнен аңланы. Эшләгән аҡсаһын әләф-тәләф итмәй, йыйып, артабан уҡырға булды. Үҙенә маҡсат ҡуйып, Һамарҙағы бер вузға уҡырға инде. Каникул ваҡыттарында эшләне, үҙ-үҙенә матди ярҙам итте. Үҙ теләге менән армияға ла барып ҡайтты, "Армияға бармаһам, мин ысын ир-егет, йүнле белгес була алмаҫмын", - тип аңлатты ул миңә был теләген. Уйлана, үҙ алдына оло маҡсат ҡуя белгән егеткә ҡарап, шатланып бөтә алмайым. Ошондай матур йәшәргә теләктәре ҙур булған кешеләргә ярҙам итергә кәрәк. Хәҙер йәштәр тормош ауырлығына ҡаршы көрәшеп тормай бит, ҡырынға алып китеүселәр артынан эйәрә лә китә. Кемдәр юғары урында ултыра, кемдең аҡсаһы бар - шулар мохтаж балаларға ярҙам итһә, оло сауап алыр, бер генә кешене булһа ла аяуһыҙ яҙмыштан ҡотҡарыр ине.

### Оянһында ни күрһә…

Әсәйем диндар кеше булды, ғүмер буйы намаҙ уҡыны. Үҙенең тәртибе менән үрнәк күрһәтте. Аҙ һөйләне, фекерен туплап, төйнәп, матур ғына иттереп әйтә лә, игәп ултырмаҫ ине. Йәшәй-йәшәй шуны аңланым: тимәк, ул иң кәрәклеһен һеңдереп кенә әйткән дә, игәп, кире реакция тыуҙырмаған. Беҙ ғаиләлә атай менән әсәйҙең нимәгәлер низағлашып, бәхәсләшеп, талашып ултырғанын күрмәнек. Тәрбиә - ул, минеңсә, күсәгилешлек. Атай-әсәйҙән килгән ғаилә традицияһын, шөкөр, беҙҙең ғаилә лә, шулай уҡ ағайымдарҙың ғаиләләре лә дауам итә.

Ә бит электән килгән тәрбиә өлгөләрен, динде һанға һуҡмаған ғаиләләр ҙә бар. Һөҙөмтә билдәле: ата-әсә үҙенең сәскәнен ура, балалары иманһыҙ булып үҫә, ҡартайған көнөндә игелек күрһәтмәй. Шунан, бындай баланы

### Бар саралар эскеһеҙ үтһен!

Йәштәр айыҡлыҡ өсөн көрәш башланы, тинек. Улар мәсьәләне дөрөҫ ҡуя: эскеселәргә ҡаршы көрәшеү файҙаһыҙ, эсмәүселәрҙе тәрбиәләргә кәрәк. Эскелек табындары менән билдәләнгән байрамдарҙы кисектереү, был табындар урынына яңы йолалар, саралар уйлап сығарыу фарыз. Мәҫәлән, мәктәптәрҙә лә ҡайһы саҡта Уҡытыусылар көнөн, йә башҡа байрамдарҙы эске табындары менән билдәләү китте. Кем-кем, уҡытыусы был йәһәттән насар өлгө күрһәтергә тейеш түгел. Уҡытыусының бөтөн ҡылығы, эшләгән эше балаларҙың күҙ алдында. Дәрестә матур итеп һүҙ һөйләп тороп, дәрестән сығыу менән икенсе төрлө ҡыланыу бала күңеленә яра һала, уны рухи, әхлаҡи яҡтан тарҡата. Шуға мәктәптәге бындай насар "йолаларҙы" тамырынан йолҡоп ташларға кәрәк.

Тағы бер насар күренеш: ауылдарҙа, хеҙмәт коллективтарында зыялылар, яҡташ шәхестәр, яҙыусылар менән осрашыуҙар ойошторолоп тора. Улар халыҡ алдында матур итеп телмәр тота, дөрөҫ йәштәргә өйрәтә. Иманы камил булған, оло дәрәжәләргә өлгәшкән был кешеләр өлгөһө осрашыуҙа ҡатнашыусыларҙы рухландыра. Һуңынан ҡунаҡтарҙы "һыйларға" алып китәләр. Их, бөтөн эште боҙа бит ошондай "һыйлауҙар". Халыҡ бит барыһын да күреп, белеп тора. "Һыйлауҙарға" ҡаршы тора алмайһың, ҡулыңа рюмка тотаһың икән, нисек һинең иманың камил булыуы мөмкин?

Эйе, беҙҙең йәмғиәттә эскән кешеләрҙән, эскелек табындарынан ситтә булыу бик ҡыйын. Динлемен, тип, туғандарыбыҙ йыйған табындарҙа ҡатнашмай ҙа сараң юҡ. Динебеҙ, эскән кеше менән бер табында ултырыу ҙа гонаһ, тиһә лә, хәҙерге ваҡытта ундай табындарға ла йөрөргә, ундағы эсеүҙе бик өнәмәгән кешеләрҙе үҙ яғына ауҙарырға кәрәк, тип уйлайым мин. Ҡунаҡҡа бараһың, яулығыңды ябынаһың да табын артына үтәһең - эргәңдә ултырған ҡатын-ҡыҙ, ир-ат барыбер ҙә һинән тартына. Был алым кешегә, эсмә, тип тылҡығанға ҡарағанда күпкә һөҙөмтәлерәк. Эсергә яратмағаны һиңә булыр. Беҙҙә бит хәҙер мохтаждар күп - шуларға ярҙам ит, уның сауабы хаж сауабынан да ҙурҙыр, тим. Ике тапҡыр, биш тапҡыр барып, был фарыз ғәмәлде экскурсияға әйләндереү хаждың бәҫен ебәреү, тип уйлайым.

Мохтажлыҡ нимәнән килеп сыға? Тағы ла шул аңһыҙлыҡ арҡаһында, әҙергә - бәҙер булып өйрәнеүҙән килә. Халыҡты эштән, ерҙән айырҙылар. Ололарҙа был ғәҙәткә һеңгән: ауылда булһынмы ул, ҡалаламы, ергә нимәлер һалырға, ултыртырға, сәсергә кәрәклеген белә һәм шуны атҡара ла. Ирем менән күҙәтеп йөрөп, үҙ-ара һөйләшәбеҙ - баҡсаларҙа бер генә йәш кеше юҡ, тик ололар йөрөй. Балалар эшләргә теләмәй, ә ашарға яраталар. Беҙҙе эштән, ерҙән биҙҙереү сәйәсәте лә алып барылды шул. Эшләргә теләмәй, пособиеһы өсөн генә бала табыу модаға әйләнеп бара. Хоҙай Тәғәләнең изге бүләге - бала менән һатыулашыу кеүек күрәм пособие алырға бала тапҡандарҙы. Хатта балаларының аталарын да аныҡ ҡына белмәгән ҡатындар ҙа бар. Был - фажиғә, динһеҙлек арҡаһында төшөлгән иң түбән кимәл.

Имен булмаған, рухи, әхлаҡи яҡтан тарҡалған ғаилә - киләсәге булмаған ғаилә ул. Уларҙы бер нисек тә ыҡҡа килтереү мөмкин

***Мохтажлыҡ нимәнән килеп сыға? Тағы ла шул аңһыҙлыҡ арҡаһында, әҙергә - бәҙер булып өйрәнеүҙән килә. Халыҡты эштән, ерҙән айырҙылар. Ололарҙа был ғәҙәткә һеңгән: ауылда булһынмы ул, ҡалаламы, ергә нимәлер һалырға, ултыртырға, сәсергә кәрәклеген белә һәм шуны атҡара ла. Ирем менән күҙәтеп йөрөп, үҙ-ара һөйләшәбеҙ - баҡсаларҙа бер генә йәш кеше юҡ, тик ололар йөрөй. Балалар эшләргә теләмәй, ә ашарға яраталар. Беҙҙе эштән, ерҙән биҙҙереү сәйәсәте лә алып барылды шул. Эшләргә теләмәй, пособиеһы өсөн генә бала табыу модаға әйләнеп бара. Хоҙай Тәғәләнең изге бүләге - бала менән һатыулашыу кеүек күрәм пособие алырға бала тапҡандарҙы. Хатта балаларының аталарын да аныҡ ҡына белмәгән ҡатындар ҙа бар. Был - фажиғә, динһеҙлек арҡаһында төшөлгән иң түбән кимәл.***

яҡынырaҡ ултырырға тырыша. Яңылыш ҡына эргәнә ултырған эсергә яратыусылар йәйләп ҡына икенсе яҡҡа шыуыша. Мәжлестәге кешеләр шулай аҡрынлап икегә бүленә. Сараһыҙҙан ултырабыҙ беҙ ул табындарҙа. Шунда йәйләп ҡына, матурлап ҡына аҡыл бирәбеҙ. Табында динле кеше ултырғанда эсергә яратыусылар барыбер ҙә тыйыла. Һәр кемдең күңел төпкөлөндә дингә, боронғолоҡҡа ҡарата ихтирам бар. Шуға күрә матур итеп әйткән һүҙ барыбер ныҡыраҡ тәьҫир итә.

### "Беҙҙе эҙләп йөрөйәсәкһегеҙ әле..."

Олатайым, әсәйемдең бер туған ағаһы Исмәғил Иҙрисов хәлфә булды. Аяҡһыҙ ине ул. Әммә йөҙөнөң шул тиклем илаһи нурлы булыуы һаман хәтеремдә. Мөжәүир хәҙрәттә лә шундай нур күрҙем мин. Хәҙер ундай кешеләрҙе осратыуы бик ауыр.

Мөжәүир хәҙрәтте күргәндә миңә 10 йәш ине. Унан бөркөлгән илаһи нур, уның иплән кенә, йәйләп ҡына, матур итеп һөйләшеүе мәңгелеккә күңелемә уйылған да ҡуйған. Тағы, ул минең арҡамдан һөйөп яратты ла: "Эй, ҡыҙым! Әле ваҡыт киләсәк, һеҙ беҙҙе эҙләп йөрөйәсәкһегеҙ, шул тиклем мохтаж буласаҡһығыҙ беҙгә", - тине. Ул бөгөн автобус-автобус кешеләрҙең уны эҙләп, ҡәберенә зыярат ҡылырға килеүен шул саҡта уҡ күргән булған. Зыярат ҡылырға килеүселәрҙең араларында төрлө кешеләр барҙыр, әммә барыбер кемеһелер яҡшы яҡҡа үҙгәреп, дин юлына бер аҙым булһа ла атлаясаҡ. Исмәғил олатайым Мөжәүир хәҙрәт кеүек кирәмәттәр күрһәтмәне, ләкин ҡарап ултырып ҡына кемдең ҡайһы ере ауыртыуын әйтеп бирә, өшкөрә, өшкөрөүе шул тиклем килешә ине. Хәҙрәттәрҙең, хәлфәләрҙең Аллаһы Тәғәлә менән бәйләнеше рух, әхлаҡ таҙалығынан, мосолманға фарыз 40 ғәмәлде теүәл үтәүҙән килә. Үҙҙәре саф булғас, һәр саҡ Аллаһы Тәғәлә менән бәйләнештә булғандар, Аллаһы Тәғәләне ишеткәндәр, унан килгән фекерҙе тотоп алғандар. Ул бәйләнеш хәҙер бөтөнләйгә өҙөлгән тиерлек. Әлбиттә, Хоҙай менән ундай бәйләнеш һәр кемдә бар, әммә уны үҙебеҙ, динһеҙлегебеҙ, фарыз ғәмәлдәрҙе атҡармауыбыҙ арҡаһында өҙәбеҙ. Хәҙер Аллаһы Тәғәлә менән бәйләнеше булған балалар тыуа. Киләсәктә уларға өмөт бағлайбыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!" тип милләтенә мөрәжәғәт иткән Аҡмулланың һүҙҙәре бер ваҡытта ла иҫкермәй, һәр заманда ла көнүҙәк булып яңғырай. Бөгөнгө әңгәмә барышында ла был саҡырыу төрлө миҫалдар ярҙамында нығытылып, аңлағанға ишара булды. Уҡыу - белем эстәү генә түгел, йыйған аҡылыңды башҡалар менән бүлешеү ҙә, хаталарҙан һабаҡ алыу ҙа, башҡаларҙы насар юлдан йолоп ҡалырға ярҙам итеү ҙә ул. Ололарҙың аҡыллы һүҙенә ҡолаҡ һалмағандарҙы тормош үҙе "уҡытып" тора. Әгәр бөгөнгө монологтар бер генә кеше үҙенә һабаҡ ала, уйлана икән, тимәк, көн бушҡа уҙмаған...**

Зәйтүнә ӘЙЛЕ
яҙып алды.

**Республикала ауыл хужалығы ерҙәренән халыҡҡа бушлай ер пайы биреү "Башҡортостан Республикаһында ер мөнәсәбәттәрен көйләү тураһында"ғы Башҡортостан Республикаһы Законына ярашлы 2004 йылда уҡ билдәләнгәйне. Ысынбарлыҡта иһә эштәр Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте тарафынан 2006 йылда ҡабул ителгән "Граждандарға дәүләт милкендә булған ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙе бер тапҡыр бушлай биреү буйынса район комиссиялары һәм хужалыҡ эсендәге эш тәртибен раҫлау тураһында"ғы ҡарарҙан һуң ғына башланды, тип әйтергә була. Ләкин ҡағыҙҙа, гәҙиттә, барыһы ла шыма, ә ысынбарлыҡта барыһы ла икенсе төрлө булыусан. Закон күптән ҡабул ителгән булһа ла, республикала халыҡ дәррәү генә күтәрелеп үҙенә бушлай ер пайы алыуҙы һүҙа килә. Был хәл беҙҙең битарафлыҡҡа барып төртөләме, әллә үтә алмаҫлыҡ булып күренгән административ кәртәләр алдында туҡтап ҡаламы кеше? Бөгөнгө ҡунағыбыҙ - ауылдаштары менән берлектә үҙ хоҡуҡтары, үҙ ере өсөн аҙаҡҡа тиклем көрәшеп, барлыҡ кәртәләрҙе лә еңеп сығыусы Бөрйән районы Нәби ауылы ир-уҙаманы Сабир Мөхәмәт улы КӨҪӘПҠОЛОВ ошо тәңгәлдәге ҡайһы бер һорауҙарға асыҡлыҡ индермәксе. Тыңлайыҡ.**



### Ҡаршылыҡтарҙы еңдек шулай...

Бушлай ер пайы алыу тарихы беҙҙең ауылда йыл ярым элек башланды һәм бөгөн килеп, ниһайәт, ҡулыбыҙға ошо ерҙәргә хужа булыуыбыҙ хаҡында ҡағыҙҙар алдыҡ. Бәләкәй генә ҡағыҙ киҫәген алыу өсөн ауылдаштарыма утлы-һыулы юл үтергә тура килде, тиһәм дә шаштырыу булмаҫ. Законда асыҡ һәм аныҡ рәүештә кемдең һәм ниндәй ер алырға хоҡуҡлы булыуы яҙылған, ләкин беҙҙең власть органдарында эшләүселәр күп осраҡта ул законды һанға һуҡмай. Беҙҙең Бөрйән районында ла, мәҫәлән, тәүҙә халыҡты ҡыҙыҡтырып, ҡабул ителгән законды үлтереп маҡтап, пай ерҙәрен алып хосусилаштырыу хаҡында һөйләнеләр. Халыҡ ҡуҙғалып, пай ерҙәрен юлларға тотонғайны, уларҙы был ниәтенән дүндерергә тырышыуҙар башланды. Сөнки халыҡҡа тиген дөйөм ер бүленгән, ләкин берәүгә лә аныҡ ҡына ер өлөшө күрһәтелмәгән, теркәлмәгән һәм берәүҙең дә ҡулына кәрәкле ҡағыҙҙар бирелмәгәйне. Беҙ бер нәмәгә ҡарамай, үҙ хоҡуҡтарыбыҙ өсөн көрәшергә булдыҡ һәм дөйөм йыйылыштар үткәреп, эш стратегияһын билдәләп, ер пайы бүлеү буйынса үҙебеҙҙең комиссияны төҙөнөк. Йыйылыштар үткәрә башлағас, халыҡты төрлөсә ҡурҡытыуҙар китте. Тәүҙә "Пай ерен алып, уны хосусилаштыра башлаһағыҙ, һеҙгә 15-20 мең аҡса кәрәк буласаҡ", тинеләр. Ауыл халҡы өсөн тере аҡса ауыр мәсьәлә бит инде. Был ҡурҡытыу менән алдыра алмағас, "Һөрөнтө ерҙәрҙе хосусилаштырыу бөтөнләй ҡаралмаған", тип хәбәр һалдылар. Ә "һөрөнтө ер" тигән статус алыу өсөн был майҙанда бөтә агрономик шарттарҙың үтәлеүе шарт, йәғни ер даими рәүештә һөрөлөп, эшкәртелеп, төрлө ашламалар һибелеп, бер йылда бер төрлө орлоҡ, ә икенсе йылына бөтөнләй икенсе орлоҡ сәселергә тейеш. Ә беҙҙә күбеһенсә урман һәм урман араһында бәләкәй-бәләкәй генә яландар. Шулай итеп, был ҡурҡытыуҙар ҙа көрсөккә барып төртөлдө. Артабан инде ваҡиғалар тағы ҡыйырҙы, "Ерҙе алған хәлдә лә, уның өсөн бик күп һалым түләйәсәкһегеҙ, һеҙгә ул бик ауырға төшәсәк", тип халыҡтың үҙ еренә хужа булыу теләген һүндерергә тырышты хужалар.

Ер мәсьәләһенән хәл итергә тейешле дөйөм йыйылыш булаһы көндә беҙгә аңлатып-нитеп тә тормаҫтан йыйылыш урынын бөтөнләй икенсе ауылға билдәләнеләр. Сит ауылға халыҡ күпләп бармаясаҡ, тип өмөтләнгәндәрҙер инде. Тик был хәйлә лә беҙгә кәртә була алманы. Сөнки хәҙер өй һайын тиерлек машина бар, юл йөрөү ҡыйынлыҡтары юҡ. Шулай итеп, йыйылышҡа бихисап кеше йыйылды, артыбыҙса район түрәләре лә килеп етте. Мине йыйылыш рәйесе итеп һайлап ҡуйҙылар. Йыйылышта пай ерҙәрен ҡуртымға биреү кеүек һорауҙарҙы халыҡ дәррәү рәүештә кире ҡаҡты. Күрше ауыл халҡы ла беҙҙе яҡлап сыҡты. Йыйылыштың быйдай бороолош алырын көтмәгән хужалар аптырап ҡалды, халыҡты төрлөсә ҡурҡытыуға-албырғатырға маташты. Суд менән дә ҡурҡыттылар һәм оҙаҡ та көттөрмәй, янауҙарын тормошҡа ашыра ла башланылар. Ер пайын юллай башлағандан алып, бөтә кәрәкле документтарҙы ҡулға алғанға тиклем барыһы 23 суд ултырышы аша үттек, ә прокуратура һәм башҡа органдарға яҙылған ялыуҙарҙың иҫәбе-һаны юҡ. Ләкин суд беҙҙең тарафтан ҡануниәтте боҙоу фактҡтарын тапманы һәм комиссия тарафынан башҡарылған барлыҡ эшмәкәрлекте лә дөрөҫ тип тапты. Шулай уҡ пай ерҙәренең хужалары ҡулдарына хоҡуҡтары ныҡытылған документтар юллаған арала район үҙәгендә пикет, ике митинг үтте. Улар халыҡтың урындағы район етәкселегенә ышаныусын юғалтыуын күрһәткән саралар булды.

ликала ғына түгел, ә тотош Рәсәйҙә был эште күтәреп алыусылар бик һирәк. Ни өсөн халыҡ үҙ ерен даулап күтәрелеп сыҡмай, һаман да һүҙа, шикләнә? Сөнки кешелә ҡурҡыу көслө. Уның һәр эшләгән аҙымына административ кәртә ҡуйылыуы бер кемгә лә сер түгел. Шуға күрә халыҡ ниндәй ҙә булһа эшкә тотонорға ҡурҡа. Бик теләгәндәр ҙә шөбһәләнә, сөнки кемдер берәү башын ҡалҡытһа, уға һуғырға ғына торалар, йәғни кешене баҫыу, нимәлер эшләү теләген һүндереү өсөн ҙур көс һалына.

## БӨРЙӘН ЕГЕТТӘРЕНЕҢ...

## үҙ ерҙәрен даулап алғаны




Шулай итеп, аҫаба халыҡтың үҙ еренә хужа икәнлеген, пай ере алып, уны законға ярашлы тотонорға хоҡуҡлы булыуын бар ауыл менән яҡлап сыҡтыҡ. Был халыҡтың уларҙың хоҡуҡтарын һанға һуҡмаған чиновниктарҙы еңеүе булды. "Күмәкләгән - яу ҡайтарған" тигән башҡорт мәҡәле нәҡ беҙҙең ошо эштәргә ҡарап әйтелгән кеүек, сөнки ауылдаштар менән бер төптән булып эш итмәһәк, мәсьәләне аҙағына тиклем хәл итеү ҙур һорау аҫтында булыр ине.

### Ярҙам да урап үтмәне

Пай ерҙәре менән бәйле ваҡиғалар башланғас, ҙур проблемаға килеп төртөлдөк - ул беҙҙең был юҫыҡтағы мәғлүмәтһеҙлек. Ергә ҡағылышлы законды ла тулыһынса аңлатып, төшөндөрөп биреүсе белгестәр табыуы ауыр хәҙер. Ә барлыҡ шәп идея, шәп башланғыстың да мәғлүмәтһеҙлек алдында юғалып, һүнеп ҡалыуы мөмкин. Ошо юҫыҡта мәғлүмәти ярҙам күрһәтә алырҙай кешене беҙ Ауырғазы районынан барып таптыҡ, ул - беҙҙең кеүек уҡ көрәш юлы үтеүсе Марат Әмиров атлы егет ине. Унан алынған төплө һәм файҙалы кәңәштәр менән "ҡоралланып" ҡайтыуыбыҙ ҙур ярҙам булды, үҙебеҙҙе ышаныслыраҡ тоторға булышлыҡ итте.

Шулай уҡ баш ҡаланан Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығынан килгән Арсентьев Анатолий Викторовичтың: "Эта земля Ваша! И больше ничья! Ни колхоз, никто другой не может претендовать на эти земли! Поделите эти земли между собой!" -тип сығыш яһауы халыҡҡа ныҡ тәьҫир итте. Быға тиклем дә ярҙарына һыймай ятҡан халыҡ "йылғаһы" ташып аҡты, шикләнеүҙәре бөттө, ҡурҡыуҙары юйылды, ғөмүмән, аңы асылып киткәндәй булды.

Ер пайҙарын бүлеп алыу хаҡында закон сығыуға ла байтаҡ ваҡыт үтте, ләкин республикала ғына түгел...

Тик был осраҡта бары тик "өҫтәгеләрҙе" генә ғәйепләү ҙә дөрөҫ түгел, сөнки үҙебеҙҙәге ҡурҡаҡлыҡ, наҙанлыҡ һәм битарафлыҡ та алға тәгәрәр тәгәрмәсебеҙҙе артҡа һөрәй. Нимәнелер уҡырға, өйрәнергә, белергә теләгебеҙ юҡ. Киләсәкте иртәгәһе көн менән генә һанайбыҙ, ә балаларыбыҙ һәм уларҙың балалары, халҡыбыҙ артабан нисек йәшәр тигән уй бик һирәктәрҙе генә борсой. Ябай халыҡ ҡына түгел, ә зыялыларыбыҙ тарафынан да, матбуғат биттәрендә лә был мәсьәләне яҡтыртыусылар күренмәй. Шулай уҡ халыҡтың икеләнеүе, бүлгеләнеп бөтөүе лә мәсьәләләрҙе атҡарып сығырға мөмкинлек бирмәй, сөнки берҙәм булмағандар менән эш итеү, уларҙы теге йәки был яҡҡа ауҙарыу еңелерәк. Тағы ла беҙҙең "Ә ни өсөн ул түгел, ә мин йөрөргә тейеш был эште атҡарып? Бер миңә генә кәрәкме ни?" тигән ҡараш күп яҡшы башланғыстарыбыҙға аяҡ сала ла ҡуя. Тик иң ҡурҡыуға һалғаны - был эшкә бөтөнләй битарафлыҡ күрһәтеүселәр булыуы, сөнки нәҡ битарафлыҡ донъяны көрсөккә илтеүсе, үҫеште бер урында туҡтатыусы сифаттыр тип уйлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ер мәсьәләһен хәл итеү элек-электән килгән актуаль һорауҙарҙың береһе булып ҡала килә. Аҫаба халыҡтың быуаттар дауамында һаҡлап, эшкәртеп, күҙ ҡараһылай күргән ерҙәренә ҡул һуҙыусылар һәр заманда ла булған һәм бар. Тик үҙ хоҡуғын яҡлап сыҡҡан, еренә законһыҙ дәғүә белдереүселәрҙе кире ҡағырҙай кешеләр булған саҡта ғына киләсәк быуынға көн итер ерҙәр, һыулар һыуҙар ҡалдыра алаҫағыбыҙҙы барыһы ла аңлап етмәй әле, ҡыҙғаныҫка күрә. Һәр кемгә уйланырға, фекер тупларға, үткәнен барлап, бөгөнгөһөн ҡуҙаллап, иртәгәһен ҡайғыртырға ваҡыттың нәҡ бөгөн һәм ошо урында икәнлеген аңлау мөһим.**

Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.

***✓ Ауылда "Сәмиғулла ҡарт ун ике йәшлек ейәненә Шәүрәне килен итеп алып бирә икән", тигән хәбәр таралды. Кәлимулланы урамда үҙенең йәштәштәре уйынға алмайҙар ине. Сөнки барыһы ла уны тинтәк тип һанай.***




– Бай исемен йөрөтөп, ялсылары менән бергә бесән эшләп йөрөгән кешене тәүгә күрәм, әстәғәфируллаһ, - тип ҡаршы алды ирен Мөслимә. - Көсөң ташып барамы әллә?

- Ташып бара, әсәһе, - тине Ғариф дәртле итеп. - Ҡана, берәй туҫтаҡ һалҡын ғына ҡымыҙ бир, һыуһаттырҙы.

Ғарифтың кәйефе бик яҡшы ине. Эштән арып ҡайтҡан тип уйламаҫһың да.

- Бөгөн ҡайным инеп сыҡты, - тине Мөслимә, әкрен генә тауыш менән, ниндәйҙер шомло хәбәр әйтергә теләгәндәй.

- Атайым? Ниндәй йомош менән ингән һуң? - Ишек төбөндә ултырған Ғариф һыңар итеген генә сискән килеш туҡтап ҡалды.

Алғы өйҙөң урындығында ашъяулыҡҡа табын әҙерләп йөрөгән Мөслимә мөйөштә мышнап ятҡан Кәлимуллаға күрһәтте:

- Ҡайным бына ошо малайға кәләш әпиреРгә кәрәк, ти.

- Кәлимуллағамы? - Ғариф, йылан саҡҡандай, ултырған урынынан һикереп торҙо. - Нисек?..

- Эйе. Кәлимуллаға. Тик бигүк шаулама, баланы уятырһың...

- Бала ғына бит әле ул, китсе, булмаҫ, - тип һөйләнде Ғариф. - Атай ҡарт шаяртҡандыр ул, - тине көләмһерәп.

- Шаяртыу ҡайҙа ул. Ысын, шулай тине...

- Ә кемде алып бирергә уйлай һуң ул ейәненә?

- Шәүрә киленде.

- Кемде? Шәүрә киленде?.. - Әле генә ишеткән хәбәргә ышанғыһы килмәй ҡабатлап һораны Ғариф.

- Эйе. Килен булғас - закунлы килен булһын, ти. Һаман да шул әлеге атабабаларҙан ҡалған йоланы боҙмайыҡ, ти. Килен уңған ғына күренә, ситкә ебәрергә ярамай, ти.

- Шәүрә һис тә риза булмаҫ быға...

- Кем уның ризалығын һорап торһон инде. Һине миңә көсләп ҡушҡанда беҙҙең ризалығыбыҙҙы һоранылармы һуң?

Ғариф көйөп китте:

- Эх, атай, атай, беҙҙе бәхетһеҙ итеүе етмәгән, тағы Шәүрә килендең бәхетенә ҡул һалырға йыйына. Ярай, Кәлимулла - тинтәк, бер ни ҙә аңламай. Ә бына сәскә кеүек сағында Шәүрә килен әрәм генә була инде...

- Мин дә ҡайныма шул турала әйттем дә ул...

Ҡайнаған самауыр күтәреп тыштан Шәүрә килеп инде. Килеп инеү менән Ғарифтан оялып, башын ситкә борҙо. Әммә йөҙө шат икәне һиҙелә. Бик килештереп башына ябынған аҡ яулығы, эре сәскәле, итәктәренә матур итеп йылтлап торған ебәк таҫмалар теГелгән күлдәге, төрлө тәңкәләр һәм уҡалар менән биҙәлгән, нескә билен еңелсә һығып торған йәшел камзулы Шәүрәнең унһыҙ ҙа таң ҡалырлаҡ сибәр йөҙөн тағы ла матурыраҡ итеп күрһәтә һымаҡ. Ҡайынбикәһе алдында үҙен ни өсөндөр ғәйепле итеп тойҙо.

- Әйҙә, килен, үҙең дә ултыр, сәй эсергә. Арып та киткәнһеңдер. Бесән эше еңел түгел бит ул, - тип һөйләнәһөйләнә Мөслимә ҡытай сәйнүгенән сынаяҡтарға сәй яһай башланы. Шәүрә башҡаса Ғариф яғына боролоп ҡарамаҫҡа тырышты.

Күп тә тормай, ауылда "Сәмиғулла ҡарт ун ике йәшлек ейәненә Шәүрәне килен итеп алып бирә икән", тигән хәбәр таралды. Кәлимулланы урамда үҙенең йәштәштәре уйынға алмайҙар ине. Сөнки барыһы ла уны тинтәк тип һанай. Шуның өсөн дә ул һәр саҡ үҙенән өс-дүрт йәшкә кесерәк балалар менән уйнай. Балалар ҙа уны тулы исеме менән атамай, "Кәлим", тип кенә йөрөтә. Был исемгә Кәлимулла үҙе лә өйрәнеп бөткән. Аң үҫеше буйынса ул тап ана шул ете-һигеҙ йәштәге балаларҙан да артыҡ түгел. Шулар менән бергә уйнап, улар кеүек көн дә күлдәк-ыштанын бысратып өйгә ҡайта.

Бер көн Кәлимулла өйгә ҡысҡырып илап килеп инде.

- Әсә-ә-әй, башҡаса мин Байморат менән уйнамайы-ы-ым! - тип бауылданы ул.

- Ни булды, улым? Ул һиңә һуҡтымы әллә?

- Ю-у-уҡ, ул мине үсекләй.

- Ҡалайтып үсекләй һуң?

- "Кәлим-кейәү", тип эләклә-ә-әй, - тип Кәлимулла тағы ла нығыраҡ ҡысҡырып иларға тотондо.

Мөслимә улын йыуатты.

- Ярар, улым, бушҡа илама. - Улын ҡосаҡлап алды, үҙенең күҙҙәренә йәш тулды. Нисек итеп шундай сабый баланы өйләндереп, унһыҙ ҙа тулы булмаған күңелен өҙгөләргә инде? Һис бер гонаһы булмаған сабыйҙы мыҫҡыллау була бит был. "Эй, ҡайным, ни өсөн беҙҙең барыбыҙҙы ла шулай ҡайғырып, ут йотоп йәшәргә мәжбүр итәһең? Кәлимуллаға, бәлки, бер ҡасан да оло кеше булырға ла насип булмаҫ. Сөнки уны Тәңре ғүмере буйына сабый булып йәшәр өсөн яратҡан..." Ғәзиз улы өсөн ҡайғырып тәү тапҡыр ғына иламай Мөслимә.

...Көндәр әле ярайһы ғына йылы булып торһа ла, таңға табан һыуыта башлауына ҡарап, йәй үтеп барғанын һиҙергә була. Хужалыҡ мәшәҡәттәренә сумып, Мөслимә тирә-йүнендә ниндәй хәлдәр булыуына ла иғтибар итмәне. Йә Сабирға, йә Сәбиләгә берәй эш ҡуша. Уның шулай хужабикәлек һәләте арҡаһында Шәүрә лә эшһеҙлектән интекмәй. Бала сағынан эшкә өйрәнгәнгә күрә, Мөслимә йыш ҡына ең һыҙғанып өй эштәренә үҙе лә керешеп китә. Ә Кәлимулла, ғәҙәтенсә, уйын менән мәшғүл булып, һыу буйынан ҡайтышмай.

Шәүрә менән Ғариф осрашҡан арала бер-береһенә мөхәббәтле ҡараштар менән күҙ атып, икеһе лә эстән генә янып йөрөнө. Уларҙың эсендәге көслө ялҡын бына-бына тышҡа бәреп сығыр һымаҡ.

* * *

Сәмиғулла ҡарт был юлы ла оҙаҡ көттөрмәне. Бер көн ул улын өйөнә саҡырып алды.

- Ғарифйән улым, - тине ул иҫәнлекһаулыҡ һорашҡандан һуң. - Мин һине бер эш буйынса саҡырғайным әле. Әле, үҙең ҡырҙа саҡта ул турала Мөслимә киленгә лә аңғартҡайным.

- Ниндәй эш ул, атай? - тигән булды Ғариф, ни хаҡта һүҙ барырын һиҙенһә лә.

- Әүәлдән ҡалған йола буйынса, ҡатын-ҡыҙ яңғыҙ торорға тейеш түгел икәне үҙеңә мәғлүмдер...

- Шунан?

- Шәүрә киленде һис кисекмәҫтән кейәүгә бирергә кәрәк.

- Кемгә?

- Кемгә тип ни, килен әйткәндер инде. Үҙ кешеңде ситкә ебәреп булмай бит. Беҙ уны Кәлимуллаға никахлап ҡуйырға бурыслыбыҙ.

- Бәй, атай, Кәлимулла бала ғына бит әле. Аҡылға ла зәғиферәк...

- Ырыуҙың ҡотон ебәрергә ярамай, улым. Шәүрә бик яҡшы килен булыр. Уңған ғына күренә түгелме һуң? Әҙ генә булһа ла мал-тыуары бар.

- Эш малдамы ни, атай...

- Малда ғына түгел, әлбиттә. Шәүрә - уңған килен тим бит. Үҙегеҙгә, Мөслимә киленгә ярҙамсы ла булыр.

- Атай, килен булһа ла, Шәүрә - әҙәм балаһы бит. Уның күңелен уйламаһыңмы ни?

- Уның күңеле тип ни, үҙен ситкә типмәгән өсөн ул беҙгә рәхмәттәр генә уҡырға тейеш...

- Юҡ, атай, ул беҙгә ләғнәттәр генә уҡыясаҡ. Әҙәм балаһын бәхетһеҙ яһап, Аллаһ алдында гонаһлы булмайыҡ.

Сәмиғулла ҡарт ҡыҙып китте.

-Йомортҡа тауыҡҡа өйрәткән шикелле, миңә аҡыл өйрәтеп ултырма, малай аҡтығы! Етмештән уҙып, һинән аҡыл һорап ултырмаҫмын инде. Киленгә әйт, киләһе йомаға әҙерләнә торһон. Ейәнемде башлы-күҙле итмәй тороп, гүргә керәсәгем юҡ, - ул ҡыҙғандан-ҡыҙа барҙы.

- Атай, һин үлергә йыйынмайһың бит, нишләп ундай һүҙҙәр һөйләйһең?

- Үҙеңде Мөслимә килен менән өйләндергәндә лә ҡаршылашып маташа инең. Ә бына хәҙер деү теттереп йәшәп ятаһығыҙ.

- Эйе шул, атай, бик шәп йәшәп ятабыҙ, - тип асыуланып көлдө Ғариф. Башҡаса атаһы менән бәхәсләшеү мәғәнәһеҙ икәнен аңланы.

- Шулай булғас, бар, әйткәнде эшлә!

Ғариф бүтәнсә бер ни ҙә өндәшмәй, башын аҫҡа эйеп, атаһының өйөнән сығып китте. Шул ваҡытта уға атаһы, башҡаларҙан ҡыҙғанып, үҙ балаларын тотоп ашаған йәнлекте хәтерләтте. Ғарифтың әсәһе Мәҙинә әбей был юлы ирҙәрҙең һүҙенә ҡыҫылманы. Ғүмер буйы иренә бер һүҙһеҙ бойһоноп йәшәгән ҡатын-ҡыҙҙың әйтер һүҙҙәре лә бар ине, әлбиттә. Әммә ире уның һүҙҙәренә ҡолаҡ һалып торамы һуң инде...

Иртәгеһен Ғариф таң менән тороп Әхмәҙулла муллаға китте. Кешеләр менән алсаҡ һәм аҡыллы һөйләшеүе, хәйер-саҙаҡаға ҡомһоҙ булмауы, уҡымышлылығы һәм башҡа бик күп яҡшы сифаттары өсөн Ғариф был йәш мулланы бик тә хөрмәт итә ине.

- Йә, Ғарифйән ҡусты, ни йомош менән килеп сыҡтың? - тип һораны Әхмәҙулла мулла иҫәнлек-һаулыҡ, хәл-әхүәл һорашҡандан һуң.

- Әле кәңәш һорарға тип килгәйнем, мулла ағай, - тине Ғариф бер аҙ уңайһыҙланғандай. - Һин ҙур уҡыуҙы уҡып ҡайтҡан, тиҙәр...

- Әйҙә, ҡустым, рәхим итеп бир һорауыңды. Хәлемсә яуап бирергә тырышырмын.

Ғариф кисә атаһы менән ни һөйләшкәндәрен муллаға ҡыҫҡаса аңғартып бирҙе. Ғарифты бик иғтибар менән тыңлап бөткәс, Әхмәҙулла мулла күҙҙәрен ярым йомған килеш, бер аҙ уйланып ултырҙы.

- Бына нәмә, Ғариф туғаным, үҙеңә Мөслимә еңгәңде көсләп алып биреү дөрөҫ булмаған кеүек, аҡылға зәғиф, өҫтәүенә, бәлиғ булмаған сабыйға Шәүрә киленде никахлау - шәриғәт ҡушмаған эш булыр. Мин үҙем Аллаһ алдында гонаһлы булып, бындай никахты уҡыуҙан ҡырҡа баш тартыр инем. Әммә, үкенескә ҡаршы, күп кенә муллаларыбыҙ ошо мәсьәләлә үҙҙәренең белемһеҙлеген күрһәтә. Ә ҡайһы берәүҙәрҙе байҙарҙың мул ғына биргән хәйер-саҙаҡаһы ылыҡтырыуы ла барҙыр... Атайың - Сәмиғулла олатай Мөслимә еңгә менән һиңә никах уҡырға ла мине өгөтләп ҡарағайны. Әммә мин быға риза булманым. Ә бынан ары ул миңә бындай һорауҙар менән килеүе - икеле... Ихтимал, тағы ла Хәлфитдин хәҙрәтте саҡырыр. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡустым, был ауыл муллалары мине бигүк яратып та етмәй. Шуның өсөн дә бик оҙаҡҡа ла һуҙып тормаҫтан, үҙемдең тыуған ауылыма - Фәйзуллаға ҡайтып китергә уйлап торам әле...

* * *

Кәлимуллаға кейәүгә бирергә йыйыныуҙары тураһында әллә ҡасан уҡ ишеткән Шәүрәнең ни өсөндөр был хәбәргә ышанғыһы килмәгәйне. Мөслимә ҡайынбикәһе ҡайныһының шул ҡарары ысын икәнде әйткәс тә Шәүрә ҡайғыға батты. Ғүмер буйы шулай бәхетһеҙ булып йәшәргә яҙғанмы икән уға? Иренең үлеү хәсрәтен онотоуға, уны тағы бер ҡайғы көтөп торған икән. Ярар ине, Кәлимуллаһы аҡылға камил булһа, үҙе ҡарап үҫтереп алыр ине. Исмаһам, шундай өмөт тә юҡ бит. Ә Ғариф... Уйыңа килеү менән бөтә донъяңды оноттора торған берҙән-бер кеше. Ул - ҡайны булырға тейеш! Шәүрәнең башы әйләнеп китте, ҡолаҡтары шауланы.

- Уф, Аллам, - тип уфтанды Шәүрә. Үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәне.

- Беҙҙең яҙмыш шулайҙыр инде, килен, ни хәл итәһең инде, - тине Мөслимә. Был йортта ҡайнымдың һүҙенән сығып булмай шул. Мин үҙем дә, Ғариф та һинең кеүек ирекһеҙлеккә дусар ителгән кешеләрбеҙ бит. Был фани донъяла ыҙалыҡтар күргән кеше, теге донъяға барғас бәхетле булыр, ти. Үтә ҡайғырма һин, килен, түҙергә тырыш. Беҙ һине ҡыйырһытмабыҙ. - Килененең арҡаһынан һөйҙө. Бергә йәшәгән ваҡыт эсендә ҡыҙы кеүек яратып өлгөргәйне Мөслимә киленен.

Сабир менән Сәбилә, ҡасандыр "ер емертеп" баҫып йөрөгән, хатта ҡайсаҡ екеренергә лә ятҡан "уҫал Мөслимә"нең башына ҡайғы төшкән һайын, күҙ алдында тиерлек йыуашлана, рәхимлерәк була барыуына ғәжәпләнә ине. Ялсылыры фекерләүенсә, Мөслимәне алмаштырып ҡуяларМы ни! Унан да изге кеше юҡ һымаҡ...

Кәлимулла бер көн әсәһенә:

- Әсәй, миңә Шәүрә еңгәйҙе кәләш итеп әпирмәгеҙ! - тине.

- Нишләп улай тиһең, улым? - тип һораны әсәһе.

- Ул ҡул йыуҙыра белмәй, - тип, ғәҙәтенсә танауын соҡой-соҡой бер урында тапанды Кәлимулла.

- Бәй, нишләп йыуҙыра белмәһен ти? Еңгәң бөтә нәмәне лә эшләй беләсе.

- Юҡ, белмәй, - тип һаман нығышты малай. - Мин үҙем күреп торҙом. Атайымдың ҡулын йыуҙырғанда, Шәүрә еңгәм атайыма текләп алған да, ҡомғандағы һыуҙы ергә ҡойоп тик тора...

Быны ишетеп, түрбашта ниҙер эшләп йөрөгән Шәүрә, сикәләре ҡыҙарып, оялып китте. "Тинтәк булһа ла бик иғтибарлы ғына әле ул", тип уйлап ҡуйҙы. Был малайҙан тағы ла әллә ниҙәр ишетмәҫ өсөн йәһәт кенә тышҡа сығып китеү яғын ҡараны. Ә Мөслимә улының был һүҙҙәренә әллә ни әһәмиәт бирмәгәндәй, көлөп кенә ҡуйҙы.

- Өйрәнер еңгәң, ҡул йыуҙырырға ла өйрәнер. Йәш бит әле, - тигән булды.

- Ә өйрәнмәһә, мин уны һары тал менән ярырмын, эйеме, әсәй, - тип һөйләнеүен дауам итте малай.

- Аһ, аһ, улым, уны һиңә кем өйрәтте?

- Түбәнге остағы Сибәғәт ағай әйтте, - тине баянан бирле танауынан бармағын ала алмаған Кәлимулла. - Бисәне кеше шулайтып өйрәтә, тине.

Мөслимә күҙ йәштәре аша улының һүҙҙәренә көлдө лә:

- Ярай, бар, балам, тышҡа сығып ин дә йоҡларға ят, - тип улын тышҡа сығарып ебәрҙе.

Бер аҙҙан Кәлимулла: "Әсәй, атайым ҡайтты. Арыған. Ҡымыҙ һорай. Үҙе тышта аты янында", - тип, ышбыш тын алып килеп инде.

- Бар әле, килен, ана ҡайынеҙнәңә ҡымыҙ сығарып бир, - тип Мөслимә килененә бойорҙо. Шәүрә ағас туҫтаҡҡа мөлдөрәмә тултырып ҡымыҙ һалып, тышҡа алып сыҡты.

- Ҡымыҙҙы тик үҙең генә алып сығырыңды күңелем һиҙенгәйне, килен, - тип йылмайып ҡаршы алды уны Ғариф.

- Ниңә, мин алып сығыу насармы әллә? - тигән булды Шәүрә, уның бит остары алһыуланды.

- Юҡ, киреһенсә, Шәүрәкәй. Һинең ҡулыңдан ҡымыҙ эсеү - минең өсөн зәм-зәм һыуы эсеү менән бер. Ғүмерем буйы тик һинең ҡулыңдан ғына алып ашар һәм эсер инем, Шәүрә, - тине Ғариф. Тулҡынланыуҙан уның йөрәге күкрәк ситлеген ватып сығырҙай булып йыш-йыш тибә ине.

Ғарифтың шундай ялҡынлы һүҙҙәренә Шәүрәнең башы әйләнде. Телен йотҡандай, ни әйтергә лә белмәне. Йүгереп өйгә инеп китте. Шүрәнең күңеле үтә лә шатлыҡлы хистәр менән тулы ине. Сөнки әле генә Ғарифтың үҙенә айырыуса ҡараушта икәнен белде ул! Ғарифтың да эсендә уға ҡарата мөхәббәт уты яна!.. Бесәнгә барғанда йырлаған моңло йыры фәҡәт уға ғына бағышланғандыр...

Йүгереп инеп барышлай, Шәүрә ишек тупһаһына абынып, саҡ-саҡ йығылып китмәне.

- Атаҡ-атаҡ, ни булды, килен? Әллә берәй нәмәнән ҡурҡтыңмы? - тип һораны Мөслимә килененең абынаһөрөнә инеп килгәнен күреп.

- Юҡ, ҡайынбикә, былай ғына, - тине Шәүрә. Уның шатлыҡ тулған йөҙө ҡайынбикәһенең иғтибарынан ситтә ҡалманы. Шәүрә ике ҡулы менән битен ҡаплап, шаршау артына инеп китте.

**(Дауамы бар).**

*ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ*

**Бөгөнгө көндә ҡатын-ҡыҙ нимә менән генә шөғөлләнмәй: сигеү, бәйләү кеүек электән килгән шөғөлдәр янына хәҙер яңылары ла өҫтәлде. Мәҫәлән, беҙҙең үҙебеҙҙең арала тәбиғи косметика етештереп, кешеләргә таҙа продукт еткереүселәр ҙә бар. Бәләкәй саҡтан ҡул эштәрен үҙ иткән Әлиә ТАЙБУҒИНА бөгөн ятыраҡ, ә бәлки, замансараҡ шөғөлгә тотонорға баҙнат итә. Әлеге көндә ул үҙе яһаған тәбиғи косметика буйынса үҙ эшен асҡан, интернет магазинын булдырған. Хәйер, үҙенең эше тураһында һүҙҙе Әлиә үҙе һөйләһен әле. Һүҙ - уға:**

# ЗАМАНҒА ЯРАҠЛАШЫП...

## заманса һөнәрҙәр үҙләштер



### Тәбиғилек эҙләп

Бөтә дәүерҙә лә ҡатын-ҡыҙҙар ниндәй ҙә булһа ҡул эше менән шөғөлләнгән һәм был уларҙың төп шөғөлө һаналған. Ҡул эше оҫталары үҙҙәренең серҙәрен, белемдәрен һәм һәләттәрен быуындан-быуынға тапшыра килгән. Ғаиләне матди яҡтан тәьмин итеүҙең бер юлы булып торғанға күрә, элекке замандарҙа һәр ҡатын-ҡыҙ ҡул эше менән мәжбүри шөғөлләнгән. Бөгөн иһә ҡул эше менән ҡыҙыҡһынып, хобби рәүешендә шөғөлләнәләр, шулай ҙа ҡайһы бер осраҡта ул төп шөғөл дә булып китә. Интернеттың һәр замана кешеһенең тормошона үтеп инеүе ҡул эшен өйрәнеүҙе еңелләштерҙе. Теләге булған һәр кем ундағы төрлө сайттарға инеп, үҙен ҡыҙыҡһындырған шөғөлдө өйрәнә ала. Мин үҙем бәләкәй саҡтан бәйләй инем, ә хәҙер интернеттың яңы мөмкинлектәрен файҙаланып, ят шөғөлдәр ҙә үҙләштерәм. Мәҫәлән, мосолман ҡыҙҙарына яулыҡ ябынырға уңайлы булһын өсөн энә башына пластиканан төрлө ҙурлыҡтағы розалар яһаным. Уларҙы күберәк бүләк итә инем. Тәбиғи косметика яһау серенә лә интернет аша өйрәндем.

Ни өсөн тәбиғи косметикаға тотондоғоҙ, тип һорарһығыҙ. Бынан алдараҡ бер нисә косметика компанияһында шөғөлләнгәйнем. Уларҙың продукцияһы менән үҙем дә ҡулландым. Тәбиғи косметика тип маҡтаһалар ҙа, был косметикаларҙа химияның күп булыуы мине борсоуға һалды. Икенсенән, сит халыҡҡа эшләп йөрөгәнсе, ниндәйҙер йүнәлештә үҙемдең айырым эшемде асып булмаҫ инеме икән, тип уйлана башланым. Шулай уҡ был ваҡытта яҡын әхирәтем тәбиғи һабындар ҡайнатыу менән шөғөлләнә ине. Уның был шөғөлдө маҡтап һөйләүе лә тәьҫир иткәндер, күрәһең, мин дә тәбиғи һабындар ҡайнатып ҡарарға тәүәккәллек иттем.

Бөгөн бөтә кеше тәбиғилеккә ынтыла. Күрәһең, халыҡты төрлө яһалма әйберҙәр, ризыҡтар тамам ялҡытҡандыр. Минең тәбиғи косметиканы ла яратып, бик теләп алалар. www.saflife.ucoz.ru интернет магазиным бар. Шулай уҡ Ләлә мәсете магазинында ла мин яһаған тәбиғи косметика һатыуға ҡуйылған. Таныштарыма, магазин-офистарға йөрөп һатам. Бигерәк тә матурлыҡ салондарында теләп алалар.

Элек-электән ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәрен ҡарап ҡына йөрөткән, косметика урынына тәбиғи майҙар ҡулланған. Өләсәйҙәр ҡулланған ысулдарға барыбер тулыһынса ҡайтып булмай. Шуға күрә, минеңсә, бөгөн иң яҡшыһы - тәбиғи косметика ҡулланыу. Был шөғөлөм үҙемә бик оҡшай, күңелемә рәхәтлек килтерә. Киләсәктә эшемде тағы ла киңәйтермен, тип ышанам.

### Айырма нимәлә?

Һабын тиренән бысраҡты, бактерияларҙы алып ташлаусы булараҡ билдәле. Ә бына бөгөнгө замандың тәбиғи һабындары тирене таҙартып ҡына ҡалмай, ул шулай уҡ косметик матдә лә булып тора. Был һабындарҙы эшләүе еңел генә. Эш барышын да әйтеп үтәйем, бәлки, кемдер ҡыҙыҡһынып, үҙе эшләп ҡарар. Тәбиғи һабындарҙы эшләр өсөн махсус һабын нигеҙҙәре кәрәк, улар магазиндарҙа ла һатыла, заказ менән интернеттан да алдырырға була. Һабын нигеҙе тулыһынса органик нигеҙҙән тора, химия бөтөнләй әҙ. Башта уны иретеп алаһың һәм кәрәкле майҙар өҫтәйһең. Мин әҙ-әҙ генә әнис, кастор майы һалам. Кастор майын бөтәһенә лә ҡушам, сөнки ул массаны күбекләргә ярҙам итә. Әҙерәк һыуынғас, эфир майы ҡушып бутайым, төрлө аҙыҡ буяуҙары һәм тәмләткестәре, файҙалы аминокислоталар ҡушам. Масса әҙер булғас, махсус формаларға һалып микротулҡынлы мейестә ҡайнатып алам. Шулай итеп, тәбиғи һабындар әҙер ҙә була. Ғәҙәти һабындарға яһалма глицерин ҡушылһа, мин тәбиғи глицерин ҡулланам. Файҙалы булғанға күрә, күберәк эфир майҙары ҡушырға тырышам.

Тәбиғи һабындар күп яҡтан файҙалы. Мәҫәлән, ябай һабын бит тиреһен ҡорота, ә тәбиғи һабындар менән битте ҡурҡмай йыуырға мөмкин. Майҙар тире аша яҡшы үтеп инә, ә әлиф майҙары өҫтән туҡландыра, шулай уҡ макияжды яҡшы алып ташлай. Ғәҙәти һабындарҙың составында йәнлек майы бар һәм беҙ унда ниндәй йәнлек майы ҡушылғанын белмәйбеҙ ( бәлки, сусҡа майылыр). Был бер аҙ шик тыуҙыра. Ә тәбиғи һабындарға бер ниндәй ҙә йәнлек майы ҡушылмай.

Косметиканың "Сөннәтул Ислам" тигән айырым серияһы бар. Һатып алыусыларҙы был сериялағы әнис һәм хильбенан яһалған косметика нығыраҡ ҡыҙыҡһындыра. Бәйғәмбәребеҙ әнис майы тураһында: "Бөтә сирҙәрҙән дә дауа", ә хильбе хаҡында: "Әгәр кешеләр хильбела нимә һаҡланғанын белһә, улар уны алтын хаҡына һатыр ине", - тип әйтеп ҡалдырған. Был майҙар, ысынлап та, бик файҙалы.

Һоло менән кофенан бит тиреһе өсөн төрлө скрабтар һәм сәстәр өсөн шампундар, какао, зәйтүн майҙарынан, бал ҡорто балауыҙынан ирен буяуҙары, какао, ши, баҙам майҙары ҡушып, тән өсөн ҡаты кремдар яһайым. Был кремдар ҡояш нурҙарының насар йоғонтоһонан яҡшы һаҡлай, тышҡы йөҙҙө матурлай, туҡландыра, тире яҡшы тын ала, ҡоро биткә ныҡ ярҙам итә. Улар бигерәк тә юлда йөрөгәндә уңайлы. Ғәҙәти кремдарға һыу, май, тағы ла улар бергә ҡушылып ҡуйырһын өсөн эмульгатор ҡушалар һәм һыу насар еҫ сығармаһын өсөн консервант өҫтәйҙәр. Ә мин һыу урынына тик консерванттар ҡушам. Шуға күрә был кремдар бөтөнләй химияһыҙ килеп сыға.

### Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух

Аллаһы Тәғәлә беҙгә аманат итеп шундай матур, камил тән биргән. Беҙҙең бурысыбыҙ - уны матур итеп тәрбиәләү. Тәнебеҙ тураһында ҡартайғас, ниндәйҙер ауырыуҙарға юлыҡҡас ҡына хәстәрләй башларға кәрәкмәй, һуңынан ҡимматерәк түләмәҫ өсөн бөгөндән үк тән сәләмәтлеген уйлай башлау мөһим. Динебеҙҙә организмға зыян килтереүсе бөтә нәмәне ҡулланыу тыйылған.

Бөгөнгө көндә косметиканың ниндәй генә төрө юҡ! Уларҙы интернет аша ла, гәзит биттәрендә лә, зәңгәр экрандар аша ла рекламалайҙар. Рекламаларҙа һәр ваҡыт косметиканың тик ыңғай яғы тураһында, атап әйткәндә, тирене йомшартыуы, дымландырыуы, сәстәрҙе ялтыратыуы, ирендәрҙе йомшартыуы тураһында ғына әйтелә. Ниңәлер әлегә тиклем зәңгәр экрандарҙан бөтә ошо косметиканың кире тәьҫире тураһында бер һүҙ ҙә булғаны юҡ. Косметиканың тирегә генә түгел, ә бөтә организмға тәьҫире көслө. Тиренең тын алыуы бөтәбеҙгә лә билдәле. Һәр көн беҙҙең тиребеҙ 8 грамм углекислоталы газды иреккә сығара һәм үҙенә 5 грамм кислород ҡабул итә. Ошо эшмәкәрлекте боҙмаҫ өсөн косметиканың тирегә тәьҫирен кәметергә кәрәк. Нәҡ тирегә крем һөртөп, беҙ кислородтың юлын быуабыҙ ҙа инде. Кремды тирегә һөрткән саҡта майлы пленка барлыҡҡа килә. Шуға күрә лә крем урынына тире өсөн махсус майҙар ҡулланырға кәрәк. Уларҙың тирегә кире тәьҫире юҡ, киреһенсә, башҡа күп йәһәттән файҙалары бихисап. Мәҫәлән, билдәле ғалим, табип Әбүғалисина роза майы тураһында: "Роза майы аң мөмкинлектәрен арттыра һәм фекерләү тиҙлеген көсәйтә", - тип яҙып ҡалдырған. Шулай уҡ башҡа майҙарҙың да файҙалары тураһында билдәле. Мәҫәлән, камфора майын тирегә һөрткән саҡта ул тирегә тәрән үтеп инә һәм организм күҙәнәктәренә һеңә. Ул шешеүҙе ҡайтара, ауыртыуҙы баҫа, нервыларҙы тынысландыра.

Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух, тиҙәр. Беҙҙең күңел торошо ла тән сәләмәтлегенә бәйле: тәнебеҙ һау, сәләмәт булһа, рухыбыҙ ҙа ныҡ, күңелебеҙ ҙә күтәренке буласаҡ. Шуға күрә беҙ тән сәләмәтлегенә иғтибарҙы бер ҡасан да кәметергә тейеш түгелбеҙ. Һау-сәләмәт булайыҡ!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Динебеҙҙә эш-хеҙмәт инҡар ителмәй, ә, киреһенсә, хуплана ғына. Мәҫәлән, бөтә бөйөк шәхестәр, бәйғәмбәрҙәр ҙә тормошта ниндәйҙер һөнәр эйәләре: Әҙәм ғәләйһис-сәләм - игенсе, Иҙрис ғәләйһис-сәләм - тегенсе, Нух ғәләйһис-сәләм - балта оҫтаһы, Ибраһим ғәләйһис-сәләм - туҡымасы, Дауыт ғәләйһис-сәләм - тимерсе, ә Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ сауҙагәр булған. Заманға яраҡлашып, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының да төрлө һөнәрҙәрҙе үҙләштереүе, шөғөлдәре буйынса шәхси эшен асырға баҙнат итеүе маҡтауға лайыҡлылыр, моғайын.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



## КӨТӨҮ ТОЙҒОҺО... стресҡа килтерә, имеш

■ Статистика буйынса, рәсәйлеләрҙең 10 проценты аҙнаһына бер тапҡыр фаст-фуд ашай. Америка менән сағыштырғанда, был һан ҙур түгел, шулай ҙа табиптар тиҙ туҡланыу урындарының йылдан-йыл күбәйә барыуына хәүефләнә башлаған да инде. Башлыса май, тоҙ, тәм көсәйтеүсе матдәләрҙән торған бындай аҙыҡ икенсе төрлө "Джанк-фуд" ("сүп-сарлы" аҙыҡ) тип йөрөтөлә. Һуңғы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, фаст-фуд күнегеүгә алып килә. Ундағы ҙур күләмдәге май һәм шәкәр баш мейеһендә үҙгәрештәр барлыҡҡа килтерә, шуға ла көндән-көн фаст-фудтан баш тартыуы ауыр була башлай. Вашингтондың табиптар комитеты хот-догты ла зыяны буйынса тәмәке менән тиңләгән. Медиктар иҫәпләүенсә, хот-догтың составындағы 50 грамм ғына эшкәртелгән итте көн һайын ашыу яман шеш ауырыуына килтереүе ихтимал.

■ Ғалимдар физик көсөргәнештең психикаға ыңғай тәьҫир итеүен күптән дәлилләгән. Табиптар әйтеүенсә, физик күнекмәләр организмда митохондрийҙарҙың күләмен арттыра. Митохондрийҙар энергия бүленеп сығыу өсөн яуаплы булғанлыҡтан, спорт менән шөғөлләнгәндән һуң көс һәм ихтыяр көсө арта. Көньяҡ Каролина университеты ғалимдары фаразлауынса, был матдәләр баш мейеһендә лә әүҙемләшә. Һөҙөмтәлә, хәтер яҡшыра, депрессия, күңел төшөнкөлөгө юҡҡа сыға.

■ Артыҡ күп йоҡларға ярамай, сөнки оҙаҡ йоҡлау һөҙөмтәһендә ҡандағы шәкәр күләме арта. Артыҡ ауырлыҡтан яфаланыусы балаларҙы тикшергәндән һуң, ғалимдар ошондай фекергә килгән. Шулай уҡ аҙ йоҡлау ҙа организм өсөн зарарлы, был осраҡта инсулин секрецияһы ҡыҫҡара. Филадельфияның балалар дауаханаһы эндокринологы Дорит Корен әйтеүенсә, глюкоза күрһәткестәре үҙгәреп тормаһын өсөн төндә 7,5-8,5 сәғәт йоҡларға кәрәк.

■ Әгәр ҙә телефондан шылтыратҡан ваҡытта теге яҡтан яуап оҙаҡ булмай тора икән, шылтыратыусы кеше көслө стресс кисереп өлгөрә, ти ғалимдар. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашҡан 2 мең кешенең 64 процентында артериаль ҡан баҫымы күтәрелеүе лә күҙәтелгән. Доктор Роджер Хендерсон аңлатыуынса, хәҙерге заман кешеләрендә сабырлыҡ, көтөү тойғолары бөтөнләй юҡ. Уларға бар нәмә лә ошо урында һәм хәҙер үк кәрәк. Был бигерәк тә йәштәрҙә асыҡ сағыла. Әгәр ҙә теләгәненә өлгәшә алмаһа, кешелә стресс кимәле шунда уҡ күтәрелә, йөрәк тибеше йышая, устар тирләй башлай, баш ауырта. Быларҙың барыһы ла хроник хәүеф тойғоһо кисереүгә генә түгел, ә аҙыҡ һеңдереү менән проблемаларға, мускулдар тартышыуына, башҡалар менән мөнәсәбәттәрҙең насарайыуына килтереүе ихтимал.

■ Кешелә үҙ-үҙенә ышаныс тойғоһо ни тиклем юғарыраҡ булһа, шул тиклем яҡшыраҡ, ти психологтар. Был ышаныс тормоштоң бөтөн өлкәләрендә лә: эштә лә, шәхси мөнәсәбәттәрҙә лә, спорт ярыштарында ла кәрәк. Калифорния университеты ғалимы Дэймс Фоулер әйтеүенсә, үҙ-үҙеңә ышана башлау өсөн үҙеңде аҡыллы һәм көслө итеп иҫәпләү ҙә етә. Статистика күрһәтеүенсә, тормошта күптәр ысынлап та үҙенең мөмкинлектәрен булғанынан күпкә юғарыраҡ, тип иҫәпләй. Мәҫәлән, вуз уҡытыусылары үҙенең уҡытыу һәләтен уртасанан юғары тип тапһа, юғары синыф уҡыусыларының 70 проценты үҙенең һәләттәрен юғары баһалай. Шулай уҡ ир-егеттәр араһында үҙҙәрен үтә сибәр тип һанаусылар күберәк икән.

ФЕКЕР ҠОРО

**Совет заманын ни тиклем генә яманларға тырышһаҡ та, ул замандарҙа матбуғат һүҙе йоғонтолораҡ, ә сифат йәмғиәттең талабына тап килгән булған, тип һөйләй хәҙерге оло быуын вәкилдәре. Ни генә тиһәк тә, ул ваҡытта журналистар етәкселәрҙең келәмгә саҡырыуынан түгел, киреһенсә, етәкселәр журналистарҙың осло күҙенә, уларҙың ҡәләменә эләгеүҙән нығыраҡ шөрләгән. Сөнки партияның ҡулы ҡаты булған, "бюро" тигәндәре иһә ете ҡат тиреңде тунаған, имеш. Шуға ла ул заманда кешелә ҡурҡыуҙан да бигерәк, оялыу хисе көслөрәк булғандыр, йәғни һәр кем күңелендә "цензор" ултырғандыр...**

# ТӘНҠИТТЕ ҠАБУЛ ИТМӘЙБЕҘ,

## ә маҡтау кимәленә етмәгәнбеҙ...

Әммә заман башҡа - заң башҡа, тигәнде һылтау иткән булып, йәмғиәттә лә, башҡа өлкәләрҙә лә, шул иҫәптән киң мәғлүмәт саралары ла сифатты юғалттыҡ, уның урынын ғәйбәт, имеш-мимеште ҡабартыу, ялтырауыҡ мәғлүмәт, кемдеңдер ҡурайына бейеү урын алды. Бер кемгә лә сер түгел, бөгөн баҙар иҡтисады шарттарында һәр кем үҙ ҡулланыусыһы өсөн көрәшә. Етештереүселәр, мәҫәлән, матур-матур ҡаптарға төрөп, юҡ ҡына тауарын һатыуға сығара. Матбуғат вәкилдәре лә тәҡдим иткән продукцияһының уҡыусы күңеленә хуш килерлек булыуы өсөн баш ватырға тейеш. Йәғни матбуғат баҫмаһы - ул шундай уҡ тауар. Журналистар тауар етештерә, ә халыҡ уны һатып ала. Бөгөн халыҡ ниндәй тауарға өҫтөнлөк бирә һуң? Статистика мәғлүмәттәре күрһәтеүенсә, кеше тәү сиратта сифат өсөн түләй һәм быға аҡса йәлләмәй. Әгәр ул һатып алған тауар сифатлы икән, ул уның хаҡына ҡарамаясаҡ, сөнки сифатлы тауар үҙе үк кешелә ҡәнәғәтлек тойғоһо тыуҙыра, аҡсаһының елгә осмауын раҫлай. Әммә бөгөн милли киң мәғлүмәт саралары тәҡдим иткән тауар халыҡ ихтыяжын ҡәнәғәтләндерәме, заман талабына яуап бирәме? Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының киң мәғлүмәт саралары менән эшләү буйынса комиссияһы ойошторған ҡорҙа ошо һорауҙарға яуап эҙләнде. Анығыраҡ әйткәндә, һөйләшеү милли мәғлүмәт баҫмаларындағы, радио һәм телевидениелағы мәғлүмәт сифаты тураһында барырға тейеш, тип планлаштырылһа ла, ғәҙәттәгесә, йыйылыусылар барлыҡ темаларҙы бер ҡосаҡҡа һыйҙырырға тырышты.

- Әлбиттә, бөгөн милли матбуғат, мәғлүмәт сараһы булараҡ, көнүҙәк ихтыяждарҙы үтәрлек кимәлдә, - тип башлап китте һүҙҙе филология фәндәре докторы, профессор Фәнил Күзбәков. - Әммә ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр самалы, шуға ла милли матбуғат, дөйөм алғанда, заман ҡуйған талаптарға яуап бирерлек түгел, тиер инем. Уның сәбәптәре нимәлә? Төп сәбәп, әлбиттә, йәмғиәттең дөйөм хәлендә. Күпселекте бөгөнгө көн матбуғаты ҡәнәғәтләндерә, әммә ул заман талаптарына яуап бирмәй. Тимәк, шундай матбуғат йәмғиәтте ҡәнәғәтләндерә икән, йәмғиәт үҙе шундай кимәлдә, йәғни сифатлы матбуғатҡа ихтыяж самалы. Тимәк, йәмғиәткә хас етешһеҙлектәр матбуғатта ла тулып ята. Быға аптырарға ла ярамай. Әйтәйек, ҡағыҙға яҙылған һүҙҙең ысынбарлыҡҡа тап килмәүе хәҙер бер кемде лә ғәжәпләндермәй. Беҙ бер төрлө һөйләйбеҙ, икенсе төрлө эшләйбеҙ,



өсөнсөнө уйлап йөрөйбөҙ, дүртенсене яҙабыҙ. Шулай итеп, матбуғаттың аяныс хәлдә булыуын, тәү сиратта, йәмғиәттең торошона бәйләп ҡарарға кәрәк.

Теге замандарҙағы, йәки әлеге заманда ла бик һирәк кенә күренеп ҡалған көрәшсе журналистарға, әлбиттә, ҡытлыҡ кисерелә хәҙер. Беҙҙә журналист кадрҙары мәсьәләһе шул тиклем ҡырҡыу тора. Журналистар әҙерләүҙең үҙағышына ҡуйылыуы хәҙер бер кем өсөн дә сер түгел. Журналистика факультеты уҡытыусыларын ошондай һөйләшеүҙәргә саҡырмайбыҙ икән, тимәк, уларға инде ҡул һелтәгәнбеҙ. Ышанырлыҡ та түгел: БДУ-ның журналистика факультетын тамамлаусыларҙың бик аҙҙары ғына журналистикала эшләй. Тимәк, Хөкүмәтте лә, Элемтә һәм киң коммуникациялар министрлығын да, Журналистар союзын да, БДУ-ны ла, киң йәмәғәтселекте лә профессиональ журналистар әҙерләү мәсьәләһе борсомай.

Бер кемгә лә яңылыҡ түгел, журналистика - ул сәйәсәт. Ә сәйәсәт ул ҡапма-ҡаршылыҡтарҙан тора. Сит илдәрҙә, мәҫәлән, Журналистарҙың бойондороҡһоҙ үҙәктәре бар. Улар объектив мәғлүмәт бирә. Беҙҙә лә, миңә ҡалһа, белгестәрҙән, йәмғиәттең абруйлы вәкилдәренән торған киң мәғлүмәт сараларының проблемаларын координациялай торған бер үҙәк кәрәк. Кемдер, беҙҙең Журналистар союзы бар, министрлыҡ бар, тип әйтер. Улар үҙҙәренең эшен башҡара. Ә был үҙәк уларҙың да эшен контролдә тота алыр ине. Сөнки ул йәмәғәтселек органы...

Журналистика өлкәһендә, ысынлап та, ҡытыршылыҡтар тулып ята. Тап шуғалыр ҙа, ҡорҙа ҡуйылған теманан - мәғлүмәт сифаты темаһынан ситкәрәк кителде. Йәғни, һәр кем үҙенең йәнен әрнеткән һүҙҙе әйтеп ҡалырға ашыҡты. Ә шулай ҙа һәр кемдең әйткәне барыбер ҙә мәғлүмәт сифатының аҡһауына барып тоташты. "Ватандаш" журналы мөхәррире урынбаҫары Сәлимйән Бәҙретдинов, мәҫәлән, бөгөн киң мәғлүмәт сараларында объектив тәнҡиттең булмауын билдәләп үтте: "Совет власы заманында тәнҡит көслөрәк ине, - тине ул.- Бөгөн ундай мәҡәләләр баҫылмай. Матбуғат баҫмалары халыҡ ихтыяжын яҡлаусы бурысын юғалтты, ул мәғлүмәт еткереүсе булып ҡына ҡалды. Әммә халыҡ беҙҙән, журналистарҙан, үҙ төбәгенең проблемаларын, тормошто алға алып барырға ҡамасаулаусы етешһеҙлектәрҙең күтәрелеүен көтә. РФ Журналистар союзы рәйесе Анатолий Богомолов бер саҡ шулай тигәйне: "Бөгөн журналистар кемгә ярарға белмәй аптырана. Ә бит улар үҙенең уҡыусыһына, тыңлаусыһына, ҡараусыһына хеҙмәт итергә тейеш..." Был, үкенескә күрә, беҙҙең адресҡа дөп-дөрөҫ әйтелгән һүҙҙәр..."

Тел белгесе, педагогика фәндәре кандидаты Вәкил Хажин журналистарҙың тел оҫталығы самалы булыуы, бигерәк тә радио-телевидение журналистарының тел ҡытыршылығы ҡолаҡты ярып инеүе тураһында белдерҙе. Һүҙҙәрҙең урынһыҙ ҡулланылыуы, калькалар булыуы ғына етмәгән, баҫымдарҙың дөрөҫ ҡуйылмауы телде ассимиляциялауға юл аса, тине ул. Уның һүҙҙәрен Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Румил Аҙнабаев та хупланы: "Радиотелевидениены тыңлаһаң, тел ҡытыршылығына иҫең китә, - тип һүҙҙе дауам итте ул. - Хатта Силәбе башҡорттары, Башҡортостан телевидениеһының телен беҙ аңламайбыҙ, тиҙәр. Иртәнге "Сәләм" программаһынан башлана телдән көлөү. Алып барыусылар әллә мәктәптә русса уҡып, туған телен өйрәнмәгән кешеләрме, әллә туған телдә теләһә нисек һөйләшергә мөмкин, тип иҫәпләүселәрме - белмәҫһең. Исмаһам, эфирға әҙерләнеп, һис юғы, яҙылған текст тотоп сыҡһындар ине. Унан һуң, киң

мәғлүмәт сараларында аналитика юҡлығына ла иғтибарығыҙҙы йүнәлтергә теләр инем. Гәзиттәрҙә белешмә, мәғлүмәт күп, аналитик мәҡәләләр юҡ. Ғөмүмән, башҡорт журналистарының үҙенә генә хас яҙыу, эшләү алымы тойолмай. Улар үҙаллы фекер йөрөтөргә, милләт проблемалары тураһында айырып яҙырға, эҙләнергә батырсылыҡ итә алмай, мотлаҡ икенсе милләт журналистары яҙғанды ғына ҡабатларға тырыша. Үҙ халҡына файҙа килтерер һүҙ әйтә алмаған, һинең журналист булып йөрөүеңдә ташҡа үлсәйем...".

Күренекле ғалим, шағир һәм яҙыусы Рәшит Шәкүр ҙа беҙҙең журналистарҙың "йомшаҡ урынын" төртөп күрһәтте, шуның менән уларҙың профессиональ кимәленә баһа бирҙе: "Халыҡ алдында торған проблемаларҙы эҙмә-эҙлекле күтәрә белмәйбеҙ. Көнүҙәктәрен дә үткәреп ебәрәбеҙ. Тормоштоң яңы ысынбарлығына үтеп инә алмайбыҙ. Халҡыбыҙҙың хәлен үҙенә үк аңлатып бирергә тейешбеҙ, быны журналистар эшләргә тейеш, әммә улар тарафынан бер ниндәй аңлатыу эше алып барылмай. Социаль проблемаларҙы ябай кеше күҙлегенән күрһәтеп биреү аҡһай..."

Шоңҡар журналының баш мөхәррире Азамат Юлдашбаев та хупланы был фекерҙәрҙе: "Ысынлап та, беҙ нимәгәлер ҡаршы көрәшәбеҙ ул. Ә бит беҙ нимәгәлер ҡаршы түгел, нимәлер өсөн көрәшергә тейешбеҙ. Бөгөн мәғариф өлкәһендәге реформалар арҡаһында меңәрләгән уҡытыусы эшһеҙ ҡалған икән, был - ысынбарлыҡ. Беҙ уларға нисек ярҙам итергә, шулай уҡ ауыл хеҙмәтсәндәренә нисек ер пайы алырға, нисек эшҡыуарлыҡ асырға, нисек кишер үҫтереп һатырға, нисек умарта тота башларға йүнәлеш бирергә тейешбеҙ. Эҙемтәләр менән һуғышырға түгел, сәбәптәр менән көрәшергә тейешбеҙ. Аналитикаға килгәндә, шундай фекер ҙә бар: матбуғат баҫмаларының рейтингын зыялылар һүҙе лә күтәрә. Зыялылар үҙ аналитикаһы менән халыҡты уята, саң ҡаға, ҡуҙғата, өмөт бирә, күңелдәргә нур өҫтәй. Әммә 2003 йылдан бирле беҙҙең зыялылар матбуғатҡа битараф. Халыҡты уйландырып, фәһемләндерер мәҡәләләр яҙмайҙар. Зыялыларыбыҙ өнһеҙ..."

Беҙҙең милли матбуғат баҫмаһына, уларҙа эшләүсе журналистарыбыҙға ҡағылған бына шундайыраҡ фекерҙәр әйтелде был ҡорҙа. Ғөмүмән, ниндәй генә һөйләшеү, йыйын, ҡор булмаһын, ул нисек, ниндәй генә формала үтмәһен, унда ҡатнашыусы аҡыллы кеше үҙенә һәр ваҡыт ниндәйҙер һабаҡ аласаҡ. Был осрашыуҙа ла кемдәрҙер барыбер ниндәйҙер фәһем алғандыр. Кемдәрҙер алмағандыр... Сөнки... Ысынлап уйланғанда, һуңғы ваҡытта башҡорт телендә һөйләшеп, бер-беребеҙҙе аңламаған осраҡтар күбәйҙе шул йәмғиәттә. Хатта был турала айырым мәҡәлә яҙырға ла мөмкин. Ә бит тарихҡа мөрәжәғәт итһәк, тап ошо төрлө телдә һөйләшеү арҡаһында Вавилон бушап ҡала. Легенда буйынса, төҙөүселәр Вавилонда һауаға етеп торған башня төҙөргә, шуның менән Аллаһы Тәғәләнән дә юғарыраҡ булырға ҡарар итә. Аллаһы Тәғәләнең быға асыуы килә һәм ул төҙөләштә эшләгән кешеләрҙе төрлө теллегә әйләндерә. Тап шул бер-береһен аңламау арҡаһында төҙөлөш туҡтала, бер аҙҙан инде халыҡ төрлө яҡҡа тарала. Әлеге ҡор ниңәлер ошо риүәйәтте иҫкә төшөрҙө...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Эйе, беҙҙә матбуғат баҫмалары дәүләт аҡсаһына йәшәй, шуға күрә лә һәр аҙымын үлсәп баҫырға, һәр һүҙен тигәндәй власҡа яраҡлаштырырға тырыша. Мәҫәлән, ниндәйҙер продукция эшләп сығарыусы заводты миҫал итеп алайыҡ. Эйе, ул да дәүләт аҡсаһына йәшәй. Әммә аҡса түләүсе дәүләт хеҙмәт процесына ҡыҫылып, технологик процесты үҙе теләгәнсә үҙгәртмәй бит. Сөнки һөҙөмтә нисек булыуы билдәле - брак! Был процесты матбуғат баҫмалары миҫалына күсерһәк, нимә күрербеҙ: һәр гәзиттең үҙенең концепцияһы, үҙ йүнәлеше, халыҡ менән бәйләнеше бар. Тимәк, халыҡ унда закон сиктәрендә үҙен борсоған мәсьәләләрҙе күтәрә, власҡа үҙ фекерен әйтә алырға тейеш - халыҡ менән власты бәйләп тороусы берҙән-бер трибуна бит ул киң мәғлүмәт саралары. Әммә ошо тәбиғи процеска "цензура" йәки объектив тәнҡитте һәм ысынбарлыҡты ҡабул итмәгән власть ҡулы килеп ҡыҫыла икән, тимәк, технологик процесс боҙола. Технологик процесты боҙоуға был ғына түгел, журналистың профессиональ кимәле лә булышлыҡ итеүе бар. Һөҙөмтәлә - брак. Тимәк, бөгөнгө матбуғат халыҡҡа нимә тәҡдим итә? Сифатһыҙ, ысынбарлыҡтан ситләшкән мәғлүмәт, әлбиттә. Бында уйланырға урын бар...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ*



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



## Сирҙең көсәйеүе тураһында

**Алдан әйтеүебеҙсә, сирҙән арыныу йыш ҡына уңайһыҙлыҡ тыуҙыра һәм ауыртыу аша бара. Был ҡиҫкенләшеүҙәр бер генә түгел, күп тапҡырҙар ҡабатлана. Хатта яңы ауырыуҙар ғына түгел, элеккеләре лә үҙен һиҙҙерә: организм таҙарына, йәшәрә!**

Ауыртыу тойғолары төрлөсә булыуы мөмкин. Ғәҙәттә, бөйәл юлдарынан таштың онталып сығыуы һиҙелмәй, ә үт ҡыуығы юлдарынан - һиҙелә, бынан тыш, улар ййыраҡ та сыға. Һәр төрлө һыу процедуралары: душ, бассейн, мунса еңеллек бирер. Улар күҙәнәктәр аша сыҡҡан тоҙҙарҙы, шлакты йыуып төшөрөр өсөн дә кәрәк. Әгәр күремегеҙ һуңлаһа ла ҡурҡмағыҙ. Ғаилә проблемалары йәки гинекологик сирҙәр булһа (2-се чакрала проблемалар бар), сеанстарҙан һуң йыш ҡына күрем циклы үҙгәрә. Күрем ваҡытында сеанстарҙы ҡалдырмағыҙ. Бәлки, ҡан күп ағыр, был көслө таҙарыныу тураһында һөйләй. Күп ҡан ағыуы киста, полип, миома, фиброматоз төйөндәр булған ҡатын-ҡыҙҙа күҙәтелә. Улар тәүҙә йомшара, шунан ҙурая (бөйөрҙәге, үт ҡыуығындағы таштар кеүек), шуға ла медицина тикшереүе ваҡытында йыш ҡына үҫә тип билдәләнә. Быны аңларға һәм сеанстарҙы ошо стадияла ла туҡтатмаҫҡа кәрәк.

Шулай уҡ ҡан тамырҙарындағы атеросклеротик ҡатламдар, таҙарырҙан алда, тәүҙә йомшара. Һөҙөмтәлә былай ҙа юғары ҡан баҫымы, тамырҙар ҡыҫылыу сәбәпле, тағы ла күтәрелеүе һәм һуңынан нормаға ҡайтыуы мөмкин. Шул ваҡытта ла һеҙ үҙегеҙҙе ғәҙәттәгесә һәйбәт тоясаҡһығыҙ.

Сеанс ваҡытында сихырҙан арыныу һыуыҡ тир, эҫе, күңел болғаныу, уҡшытыу, тән ойоу, "ҡаҙ тәне" ҡалҡыу менән оҙатылыуы ихтимал. Шулай уҡ тән ҡатыуы, тән ҡалтырауы, күҙгә "ҡурҡыныс һәм имәнес" нәмәләр күренеүе, ашҡаҙан ауыртыуы, ярау боҙолоуы, баш ауыртыуы, баш әйләнеүе, иҫнәү, иҫтән яҙыу йәки оҙаҡҡа аңды юғалтыу булыуы ла мөмкин. Был - сеанс ваҡытындағы һәм унан һуңғы кисерештәрҙең тулы булмаған исемлеге һәм уларҙың береһе лә осраҡлы түгел. Был кисерештәрҙән ҡурҡырға, ниндәйҙер сара эҙләргә һәм ниндәйҙер дарыу эсергә йүгерергә ярамай. Беренсенән, улар барыбер ярҙам итмәйәсәк, барыһы тик дауаланыу процесын һуҙасаҡтар ғына, сөнки былай ҙа шлактар тулған организмыбыҙҙы тағы ла бысратасаҡтар.

Сеанс ваҡытында һәм унан һуң сирле ағзала, шулай уҡ һынған, тайған урындарҙа, операция йөйҙәре урынында үҙегеҙ күптән инде дауаландым тип уйлаһағыҙ ҙа ауыртыу барлыҡҡа килеүе мөмкин. Ҡан баҫымының, температураның, РОЭ-ның, ҡандағы шәкәр күләменең, пульстың һикереүе, тәнгә төрлө сабыртма сығыуы ихтимал һәм бер тапҡыр ғына түгел. Кеше ҡасандыр интеккән барлыҡ ауырыуҙар, иҫке травмалар һәм уларҙың эҙемтәләре, пациентты мәңгелеккә ташлап китер алдынан "өҫкә ҡалҡып" сыға. Был яҡшы дауа һәм таҙарыныу тураһында һөйләй. Остеохондроздан арыныу ҙа ауыртыу аша сыға. Тоҙҙар сыҡҡанда ла ауыртыу көслө булыуы мөмкин. Нисек кенә ауыр булмаһын, сеанстарға йөрөргә кәрәк. Был осраҡта махсус космоэнергетик массаж яҡшы.

**Рауфан МОРТАЗИН.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Күҙгә күренмәгән терәк

**"Һеҙ - үҙегеҙҙең тәнегеҙ түгел, һеҙ - үҙегеҙҙең тәнегеҙ түгел, һеҙ- үҙегеҙҙең тәнегеҙ түгел..." (Һиндостандан Свами Амараның әйткәненән). Бына бер нисә тиҫтә йыл инде Көнсығыш фекере менән ҡыҙыҡһынам һәм һиндтарҙың уҡыған һәр лекцияһында ошо һүҙҙәрҙең ҡабатланғанын ишетәм.**

Әгәр беҙ үҙебеҙҙең тәнебеҙ түгел икән, кем һуң беҙ? Ғүмер буйы беҙ тәнебеҙҙе ашатабыҙ, уны йыйыла тотабыҙ, әйҙә һаҡлайбыҙ, енси яҡтан ҡәнәғәтләндерәбеҙ һәм уны ылыҡтырыусан итеп тәрбиәләйбеҙ. Әгәр беҙ үҙебеҙҙең тәнебеҙ түгел икән, ниңә уның тураһында шундай хәстәрлек күрәбеҙ һуң?

Тәнде камиллаштырыу тураһындағы китаптарға тотонор алдынан мин торлаҡты камиллаштырыу тураһында күп яҙҙым. Һунынан - анды камиллаштырыу тураһында, аҙаҡ ҡына рухи камиллыҡ тураһында яҙыуға күстем. Кеше йәшәгән торлаҡтан кешенең тәненә күсеү тәбиғи ине. Тән - ул беҙҙең йортобоҙ. Ул һеҙ түгел, ә һеҙҙең йортоғоҙ. Кем генә булһағыҙ ҙа, үҙ тәнегеҙҙә үҙегеҙҙе өйҙәге кеүек тояһығыҙ.

Аң һәм күңел тураһында фекер йөрөтөп, беҙ һеҙҙең ысынбарлыҡта кем икәнлегегеҙҙе беләбеҙ. Беҙ матди түгел. Беҙ - аң һәм күңел, шуға күрә "Беҙ кем?" тигән һорау бер ни тиклем фекер алышыуҙы талап итә.

Тормошобоҙҙо мөхәббәт, аҡса, ышаныслылыҡ, сәләмәтлек һәм эске торош күҙлегенән ҡарап, беҙ өйөбөҙҙөң нигеҙе - тәнебеҙ тураһында фекер алыштыҡ. Был нигеҙ беҙҙең күҙгә күренеп торған терәкте тәшкил итә. Был бик мөһим, әммә беҙҙең ысын "мин"ебеҙҙе тотоп торған нигеҙҙәр мөһимерәк. Һәм был нигеҙ - күҙгә күренмәҫ терәк.

**Көнбайыш һәм Көнсығыш: матдилыҡ рухиәткә ҡаршы**

Ер ике ҡотобо булған ҙур компас кеүек. Көнбайыш менән Көнсығыш араһында, ысынлап та, ниндәйҙер полярлыҡ бар. Ул мейенең уң һәм һул ярымшарҙарына оҡшаш. Уларҙың береһе матдилеккә, икенсеһе хистәргә, идеяларға, интуицияға, ижади һәләткә йүнәлеш алған.

Ҡитғаның Көнбайыш ярымшарында Ҡушма Штаттар алдынғы урынды биләй, цивилизация матди үҫештең иң бейек нөктәһендә тора. Көнсығыш ярымшарҙа төп урынды Һиндостан биләй. Унда рухи донъя менән бәйләнеш шундай кимәлгә еткән, һул яҡ ярымшар менән фекерләүселәр Көнсығыш ғалимдарын "мистик"тар тип атай.

Шундай мистиктарҙың береһе булып Свами Амара тора. Һиндостанда "Свами" - маҡтаулы исем, "амара" - үлемһеҙ тигәнде аңлата. Свамиҙар оккульт ғөрөф-ғәҙәттәр өлкәһендәге белемдәре һәм Көнбайыштың матдилыҡҡа йүнәлеш алған халҡына мөғжизә һәм серлелек тойорға ярҙам итеүсе ғәмәлгә эйә. Әммә һеҙ быға икенсе төрлө ҡараясаҡһығыҙ, сөнки әҙерлек үттегеҙ, мейегеҙҙең уң яҡ ярымшары менән файҙаланырға өйрәндегеҙ һәм ижад донъяһына яҡшыраҡ көйләндегеҙ.

Свами Амара XIX быуат һуңында йәшәгән бөйөк аҡыл эйәһе Рамакришнаның уҡыусыһы була. Свами Амара үҙе бер нисә көн ҡәбергә күмелгәндән һуң да тере ҡалыу һәләте менән дан ала. Ул күҙгә күренмәҫ терәк менән нисек файҙаланыуҙы белә лә инде. Алда яҙылған әҙерлекте үткәс, бәлки, үҙегеҙ ҙә "Свами" исеменә лайыҡ булырһығыҙ.

**Роберт СТОУН.**



## 17 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 12.00**

12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Черные волки", 1-я серия. Сериал
22.25 "Мульт личности"
22.55 "Прожекторперисхилтон"
23.30 "Познер"
00.35 Ночные новости
00.50 "Форс-мажоры", 4-я серия
01.45, 03.05 "Собачья работа-3"
03.00 Новости
03.35 "Американская семейка"

### РОССИЯ 1

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 161-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 191-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 7-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Пончик Люся", 1-3-я серии. Сериал
23.50 "Городок"
00.50 "Вести+"
01.10 "Профилактика"
02.20 "Честный детектив"
02.50 "Скрытые-2". Фантастика
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Эра стрельца". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы". Остросюжетный сериал
21.30 "Глухарь. Возвращение". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Футбольная ночь"
01.45 "В зоне особого риска"
02.20 "Один день. Новая версия"
03.00 "Город соблазнов". Остросюжетный сериал
04.55 "Мангуст". "Осторожно, гололед!" Детективный сериал

### БСТ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

**14.00 "Новости недели"**
**14.30, 16.30, 17.30, 18.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Царь горы"**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 Документальный фильм**
**17.15 "Надо знать!"**
**17.45 "Орнамент"**
**18.00 "Еду я в деревню"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00, 19.40, 20.40 "Американская дочь"**
**21.00 "Следопыт"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**23.00 Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**23.15 "Пора разобраться"**
**00.00 "Полезные новости"**
**00.15 "Замандаштар"**
**00.30 "Биение сердца в ритме танца"**

## 18 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Черные волки". Сериал
22.30 "Как стать здоровым и богатым"
23.10 Ночные новости
23.50 "TERRA NOVA", 5-я серия. Сериал
00.45 "Мамонт"
03.00 Новости
03.05 "Семейные грехи"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия". Сериал
